✓ Өфөләләр иғтибарына: йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында "Киске Өфө"гә 6 айға 330 һумға яҙылырға мөмкин - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 246 һум.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№40 (562)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кемдең кем булырын…



уҡытыусы ла белмәй

3

Парижды ла күрҙек…



үҙебеҙҙе лә күрһәттек!

4

Ашаған белмәй, тураған белә…



8-9 йәки Мәғарифка заманса ҡараш зарурлығы

Ярай әле балам көлә белә -



шартлап киткән кеүек был тынлыҡ…

12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф өлкәһендә туктауһыҙ реформалар, ҡыҫҡартыуҙар барған саҡта, шулай уҡ башҡа төрлө ыҙы-зыҙы шарттарында уҡытыусыла һөнәри көнө айҡанлы байрам кәйефе бармы икән?

***Лиза ӘҒӘҘУЛЛИНА, Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы:*** Бөгөнгө шарттарҙа күпселек уҡытыусыла байрам кәйефе, байрам ҡайғыһы юҡтыр, тип уйлайым. Был аңлашыла ла: быуатҡа яҡын бөтөн донъяла абруй ҡаҙанып килгән совет мәғариф системаһы бер нисә йыл эсендә юҡҡа сығарылды, уҡытыусының абруйы ҡаҡшаны, унын эш хаҡы ғына түгел, күптәренең дәрестәре, эш урындары ҡыҫҡартыла, мәктәптә тороп ҡалғандарына иһә йөк арта. Хәҙер мәктәптәрҙә белем биреү-белем алыу ҡайғыһы юҡ - бөтәһенең телендә фәҡәт Берҙәм дәүләт имтиханы.

Мәғариф системаһының иң мөһим өлөшө - тәрбиә эше бөтөнләй онотолдо, айырыуса балаларҙы хеҙмәткә, киләсәккә тормошта йәшәргә өйрәтеү тигән нәмә лә юҡҡа сыҡты. Мәктәптең абруйын хәҙер фәҡәт күпме баланың вузға инеүе, кемеһенең МДУ-ла, кемеһененең "Бауманка" ла уҡып йөрөүенә ҡарап билдәләй башланылар. Әммә аҙаҡ уларҙың эшһеҙ йөрөүендә бер кемдең дә эше юҡ. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына бер уҡыусымды күреп шатландым. Сәс киҫтерергә тип инһәм, бер салонда үҙемдең уҡыусым эшләп тора. Йүгереп килеп күреште, әйҙүкләп ултыртып, мине бына тигән итеп хеҙмәтләндереп, оҙатып ҡалды. Күренеп тора: эшенең оҫтаһы, уға сиратҡа яҙылалар. Шул бала өсөн һөйөнөүем! Етем генә ҡыҙ ине, юғалып ҡалмаған бит әле бер ҙә. Бына шундай ҡулдары һөнәр белгән, матур итеп эшләп йөрөгән уҡыусылары менән маҡтанһын ул мәктәптәр! Мәктәпкә, уҡытыусы һөнәренә мөнәсәбәт беҙҙә шунан да күренә: ярты быуат хәҙер бер генә уҡытыусының да орден, Хеҙмәт Геройы исеме менән наградланғанын ишеткәнем-күргәнем юҡ. Әле яңы ғына БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайланған депутаттар араһында ла бер генә уҡытыусы ла юҡ, исмаһам!

***Вәкил ХАЖИН, педагогия фәндәре кандидаты:*** Байрам кәйефе бөгөн байҙарҙа ғына инде ул. Йәнә лә - аҡылы булмағандарҙа... Ә уҡытыусыла байрам ҡайғыһы юҡтыр, тием: унын хәле иҫ киткес түбән төштө бөгөн. Был һөнәрҙең изгелеге, бөйөклөгө тураһында күпме аҡыллы һүҙҙәр әйтеп ҡалдырылған тарихта. Лениндың, мәҫәлән, халыҡ уҡытыусыһы беҙҙә башҡа йәмғиәт шарттарында бер ҡасан да күтәрелә алмаған юғарылыҡта торорға тейеш, тигән һүҙҙәре бар. Германияның тәүге канцлеры Бисмарк иһә: "Дәүләттең уҡытыусыға мөнәсәбәте - ул ошо дәүләттең ҡеүәтен йә иһә унын етешһеҙлеген күрһәтеп тороусы дәүләт сәйәсәте", - тип бик мәргән әйткән. Унын тағы ла, Пруссия армияһынын Австрияны еңеүе менән бәйле, Пруссия уҡытыусыһы илде һаҡлап алып ҡалды, тигән кинәйәһе лә киң билдәле. Йәғни, бында ул фәҡәт туған телде уҡытып ҡына үҙ илен һөйгән патриоттар тәрбиәләп булыуына ишара яһай. Был кинәйә шул тиклем дә әлеге беҙҙең Башҡортостанда башҡорт теленә, уны уҡытыуға булған мөнәсәбәткә тап килеп тора, тик кире яҡтан, әлбиттә. Бынан мин шуны аңлайым: туған телебеҙҙе һаҡлап ҡына беҙ милләтебеҙҙе һаҡлап ҡала аласаҡбыҙ. Шуға ла беҙҙең башҡорт теле уҡытыусылары алдында әсә телен уҡытыуҙы бығаса булмаған юғарылыҡҡа күтәреү бурысы тора. Бында хатта сәғәт һандары ла әллә ни мөһим түгел, минеңсә, ә бөгөнгө хәлде аңлап эш итеү кәрәк. Аҙнаһына ике сәғәт эсендә лә балала башҡорт теленә һөйөү, һоҡланыу тойғолары уятып өлгөрөргә була, шул уҡ ваҡыт эсендә шундай уҡ "уңыш менән" уны телдән биҙҙерергә лә була...

(Дауамы 2-се биттә).

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

*Беҙҙе илле иткән тел ул;*
*Беҙҙе билле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йәнле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йүнле иткән тел ул! -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Беҙҙе батыр иткән тел ул;*
*Беҙҙе матур иткән тел ул;*
*Беҙҙе ғорур иткән тел ул;*
*Беҙҙе сабыр иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Уралды төйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе көйөк иткән тел ул;*
*Беҙҙе бөйөк иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;*
*Изгелекте һанлар тел ул;*
*Моңло, йырлы, сәсән тел ул;*
*Утты-һыуҙы кискән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Мең-мең йылдар үткән тел ул;*
*Мең киҫелеп үҫкән тел ул;*
*Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;*
*Дуҫлыҡты аманат иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЯҢЫСА ҠАРАШ...

**"Киске Өфө" гәзите халҡыбыҙҙың борондан килгән эске рухы, фәлсәфәүи һәм дә дини донъяһын сағылдырыуы менән башҡа баҫмаларҙан айырылып тора.**

Мин "Киске Өфө"нө интернеттан, электрон вариантынан уҡыйым. Өйҙә компьютер, юлда булғанда телефон аша уҡыйым, сөнки миңә шулай уңайлыраҡ.

Башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, рухи байлығына яңыса байҡау, фаразлау аша һуғарылған төплө уй-фекерҙәргә бай мәҡәләләр бик оҡшай. "Монолог", "Диалог" рубрикаларында башҡорт зыялылары менән бер рәттән, республика ауылдарында йәшәгән, милләт рухын һаҡлап килгән аҡһаҡал, ағинәйҙәрҙең уйланыуҙарын, фекер алышыуҙарын уҡырға яратам һәм күп осраҡта уйға ҡалам. Һуңғы һандарҙың береһендә сыҡҡан Нуретдин олатай Игебаевтың дини-фәлсәфәүи фекерҙәренең ҡайһы берҙәре менән килешмәһәм дә, ул минең күңелемдә ойоп ятҡан уйҙар тулҡынын уятып ебәрҙе.

"Тарих шаңдауы" рубрикаһында яңы эҙләнеүҙәр, табыштар һәм улар тураһындағы төрлө фараздарҙы үҙ итәм. Гәзит уҡыусыларҙың үҙ тарихын белеүе, ниндәйҙер эҙләнеүҙәр алып барыуы һәм уларҙы башҡалар иғтибарына тәҡдим итеүе оҡшай. 33-сө һандағы "Ихтилал батырҙарын язалау урынылыр был" тигән мәҡәлә бик тетрәндерҙе. "Башҡорт ҡамусы" рубрикаһында Сергей Руденконың хеҙмәте аша халҡыбыҙҙың боронғо йәшәйеше, көнкүреше менән танышыу ҡыҙыҡлы, шул мәлдәргә әйләнеп ҡайтҡандай булаһың һәм был авторға рәхмәттәр уҡыйһың. Ғөмүмән, гәзиттең халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен, рухи, дини тормошон сағылдырып, шул байлыҡтарҙы яңыса фекер менән һуғарып, уҡыусыларына еткереүе бик маҡтаулы.

**Илдар ҠАҘНАБАЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәғариф өлкәһендә туктауһыҙ реформалар, кыҫҡартыуҙар барған сакта, шулай ук башка төрлө ығы-зығы шарттарында укытыусыла һөнәри көнө айканлы байрам кәйефе бармы икән?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мансур ҺИҘИӘТОВ, Белорет ҡалаһы, хаҡлы ялдағы металлург:*** Уҡытыусы булмаһам да, уҡытыусы һөнәре күңелемә һәр саҡ яҡын булды. Һоҡланып, ихтирам менән ҡараным уларға. Хәҙер нисектер, элегерәк, "генерал булырға теләмәгән һалдат һалдат түгел", ти торғайнылар армияла. Шулай уҡ, уҡытыусы булырға хыялланмаған уҡыусы ла булмағандыр тием, бала сағымды хәтерләп. Үҙем дә шул иҫәптән. Сөнки уҡытыусынан да абруйлыраҡ башҡа кеше булыуы беҙҙең күҙ алдына ла килмәй торғайны. Аң-зиһенде үҫтереүҙә унның атай, әсәй менән бер урын биләүсе булғанлығын үҫеп еткәс кенә тулыһынса аңлайһың икән. Эш һөйөүсәнлек, тырышлыҡ, бөхтәлек менән матурлыҡ, белем өлгөһө лә булды беҙҙең өсөн уҡытыусы. Беҙҙең быуын балаларына белем биреү кимәлен хәҙерге мөмкинлектәр менән сағыштырып буламы ни! Нисек итеп уҡытыусының ул саҡтағы төп белем биреү ҡоралы булған ҡара таҡтаны, ҡулынан төшмәгән аҡбур менән указканы хәҙерге интерактив таҡта менән компьютерға ярыш ҡуймаҡ кәрәк? Һуғыштан мираҫҡа ҡалған харабаларҙы бөтөрөү, быға ҡәҙәр бер ҡайҙа ла күрелмәгән бөйөк төҙөлөштәр, йыһанды үҙләштереү кеүек фиҙәкәрлек өлгөләре менән балаларҙы рухландырҙы ул уҡытыусы. Уҡыусыларының күңелендә һүрелмәҫ илһам сығанаҡтары асты.

Мәғариф өлкәһендәге бөгөнгө оптималләштереү, ҡулайлаштырыу саралары, уҡытыусының абруйын күтәрәлер, тип уйламайым. Шулай булһа ла, Өфөләге башҡорт мәктәптәре менән лицейҙарының быйылғы сығарылыш синыфтарынан ғына ла алты йөҙләп башҡорт балаһының тулыһынса тип әйтерлек юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүе ҙур шатлыҡ бөтәбеҙгә лә. Республика төбәктәрендәге лицей, гимназияларҙы тамамлаусыларҙың да күпселеге юғары уҡыу йорттары юлын һайлай. Был да ҡыуанысլы хәл, әлбиттә. Улар милләтебеҙҙең киләсәге. Ләкин был күрһәткестең БДИ һөҙөмтәһендә өлгәшелгәнлеген онотторға ярамай. Бер яҡтан ҡарағанда, беҙҙең халыҡ өсөн был бик ҡулай. Икенсенән, БДИ-ның өҫтөнлөктәре менән бергә бик күп етешһеҙлектәре лә, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, насар яҡтары ла бар икәнен күрмәү мөмкин түгел. Балалар бер нисә йыл дауамында, тик имтихан биреү өсөн һайлаған предметтарын ғына өйрәнә. Был иһә йәмғиәтебеҙҙе эрудициалы, киң белемгә эйә булыусы йәштәр менән тулылындыра тип әйтеп булмай бер нисек тә.

Туған телдәрҙе уҡытыу сәғәттәрен ҡыҫҡартыу, оптималләштереү тигән һылтау менән мәктәптәрҙе ябыу, белем биреү системаһын камиллаштырыу тигән реформаларға уны кемдәрҙеңдер мәнфәғәтенә ҡулайлаштырыу, тип ҡарайым мин. Ғәжәпкә ҡаршы, миллиондар түләп, сәкән һуғыусыларҙы, хатта йөҙәр миллионға туп тибеүселәрҙе лә сит илдән һатып алалар. Шул уҡ ваҡытта уҡытыусыларҙың матди хәлен яҡшыртыу өсөн лайыҡлы эш хаҡы түләрлек аҡса таба алмайҙар. Яңыларын төҙөү урынына йөҙәрләгән яңы мәктәптәрҙе ябалар. Аң ҡабул итмәҫлек парадоксаль күренеш был.

Уҡытыусының оҙаҡ йылдар дауамында фиҙаҡәр хеҙмәте менән иҫбатланған хоҡуҡтары ҡыҫылыуы менән килешә алмайым. Уҡытыусы менән педагог төшөнсәһе айырылғыһыҙ була торғайны. Ни эшләптер, унның педагог тигәнен төшөрөп ҡалдырып, ысын уҡытыусынан дәрес биреүсе генә яһайҙар бөгөн? Кемдәрҙер уҡытыусыға мәктәп формаһы кейҙереп, унның хоҡуҡтарын уҡыусыларыныҡы менән тиңләргә тырышһа ла, ысынбарлыҡта иһә уҡыусының хоҡуҡтары күпкә өҫтөн икәнен күптән күрәбеҙ. Үҙен ысын уҡытыусы итеп күргән кеше быға нисек түҙәлер? Әгәр мин уҡытыусы булһам, һөнәри көн айҡанлы байрам итеү дәрте, шатлыҡ тойғолары, айһай, кисерә алыр инемме икән, тип шикләнеп ҡуям...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!



Иглин районының башҡорт теле уҡытыусылары.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**

Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ -**"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** һәм 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** тигән китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың беренсе ултырышы булып үтте. Унда Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Ултырышҡа шулай уҡ Башҡортостандан РФ Федераль Йыйылышы Федерация Советы ағзалары, беҙҙең төбәктән Дәүләт Думаһы депутаттары, БР Хөкүмәте ағзалары, республиканың суд, хоҡуҡ тәртибен һаҡлау органдары етәкселәре, БР буйынса баш федераль инспектор, ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары саҡырылды.

✓Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы депутаттары республика парламенты рәйесе вазифаһына Константин Толкачевты һайлап ҡуйҙы. Республика Дәүләт Йыйылышының тәүге ултырышында бындай ҡарар күпселек тауыш менән ҡабул ителде. Депутаттарҙың 97-һе - ыңғай, өсөһө ҡаршы тауыш бирҙе, береһе икеләнеүен белдерҙе.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫарҙары итеп Йомабикә Ильясова, Франис Сәйфуллин и Вадим Старов һайланды. Ултырышта шулай уҡ һигеҙ даими комитет булдырылды. Депутаттар Зөфәр Еникеев, Румиль Аҙнабаев, Рузалия Хисмәтуллина,Рәшит Хәйруллин, Елена Родина, Рәсүл Ғосманов, Эльвира Айыҡколова, Николай Никитин комитет рәйестәре итеп һайланды. Ә Рафаэль Зиннуров Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙан РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы итеп тәғәйенләнде.

✓Парижда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙең Франциялағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы вәкиле Александр Орлов менән осрашты. Президент уға Башҡортостанда "Шлюмберже" халыҡ-ара нефть-сервис компанияһы, Францияның "Леруа Мерлен" һәм "Ашан" ритейлерҙары эшләүе хаҡында һөйләне. Республикаға "Декатлон" спорт тауарҙары сауҙа селтәрен индереү мөмкинлеге ҡарала. "Сен-Гобен" компанияһы әлеге ваҡытта эзбиз табыу буйынса яңы карьер эшкәртә. "Альстом" машиналар эшләү компанияһы республикала гидроэнергетика ҡоралдары етештереү буйынса завод төҙөй. Осрашыуҙа шулай уҡ Башҡортостанда вертолеттар эшләүҙе үҫтереү тураһында ла һүҙ барҙы.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

**Радик Өмөтҡужиндың "Киске Өфө"лә сыҡҡан "Һеҙҙән әсәйемдең еҫе килә..." исемле кинәйәһен иғтибар менән ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. Тәү ҡарауҙа "һөмһеҙ" күренгән, ул ғына ла түгел, уҡыуҙа ла иң артта һөйрәлеп килгән уҡыусыһының күңеленә "асҡыс" табырға тырышҡан һәм, һөҙөмтәлә, шул уҡыусыһы менән аңлашыуға өлгәшә алған ифрат та талантлы, ысын мәғәнәһендәге педагог хаҡында бара һүҙ. Тора-бара фән докторы булып киткән был уҡыусыһының туйына хатта әсәһе урынына саҡырыла... Ысынбарлыҡта булғанмы был хәл, юҡмы, әммә ифрат та тормошсан был кинәйә уҡыусыларҙы уйланырға мәжбүр итә... Ошо мәҡәләне уҡығас, минең дә бер нисә йыл элек булған бер хәл иҫемә төштө.**

# КЕМДЕҢ КЕМ БУЛЫРЫН...

## уҡытыусы ла белмәй



Әллә күпме йылдар күрмәгән синыфташымды осраттым автовокзалда. Синыфташ ҡына ла түгел, хатта айырылмаҫ дуҫтар инек ҡасандыр.

- Рәлиф, һаумы! - иҫкерәк кейем кейгән балалыҡ дуҫымды ҡосаҡлап уҡ алдым. Бәлки, берәй өмә-фәләндән, эштән ҡайтып киләлер, тип уйланым. Унан килеп торған насар еҫкә лә әллә ни иғтибар итмәнем.

- Зәбих, привет, - тип яуапланы бите аҙналар буйы ҡырынғыс күрмәгән синыфташым "перегар" еҫе аңҡытып.

- Күрешмәгәнгә нисәмә йылдар үтеп киткән!.. Хәл-әхүәлдәр нисек? - тип һораша башланым. Һөйләшеп ултырырға тип яҡындағы эскәмйәгә урын күрһәттем. Беҙ яҡынлаша башлау менән унда ултырған бер-ике кеше йөҙҙәренә сирҡаныу билдәһе сығарып, йәһәт кенә тороп, беҙгә урын бушатты.

- Һөйләп ташла, Рәлиф, хәлдәреңде...

-Һөйләшер өсөн тәүҙә берәрҙе төшөрөп алайыҡ, - тине дуҫым. - Осрашыу хөрмәтенә, - тип өҫтәне. Быны һиңә - мә!

- Мин эсмәйем бит әле, дуҫ, - тием тегегә.

- За то - мин эсәм...

- Улай булғас, бар эсеп сыҡ, - инде дуҫымдың хәленә ярайһы ғына төшөнә башлаған мин яҡындағы буфетҡа күрһәтәм.

- Акса юҡ, Зәбих, егерме тәнкәләй бир әле, зинһар... Кисә дуҫтың тыуған көнөнә барып, нык ҡына төшөрөп ташланған...

Уның хәленә инде төшөнөп еттем. Унда хәҙер элекке синыфташының ҡайғыһы юҡ, әлбиттә. Егерме һум сығарып тотторҙом да, ҡыҙыҡһынып, һорап ҡуйҙым:

- Нимәгә етә һиңә ул егерме һум?

-Нимәгә еткереү - мое дело, а твое дело - отдавать... - тип урыҫсалап һалдырмаһынмы был, ауыҙына май туңғыры...

...Һуңынан тағы ла бер-ике мәртәбә осраттым мин уны. Һәр саҡ шундай ҡиәфәттә, шул уҡ кимәлдәге хәл-әхүәл һөйләшеүҙәр... Уға фәҡәт "бер һыралыҡ ҡына" кәрәк... Уға төбәп уҡылған өгөт-нәсихәттәрем бөтөнләй ҡабул ителмәне, әлбиттә. Барлыҡ булмышы, холоҡ-фиғеле, нервылар системаһы оҙаҡ йылдар буйы алкоголь тәьҫиренән ныҡ ҡына үҙгәргәйне. Ғөмүмән, ҡасандыр мин белгән Рәлифтән бер нәмә лә ҡалмағайны...

Ә бала сакта ул синыфта иң тәртипле, иң һәләтле, иң алдынғы уҡыусыларҙың береһе ине бит! Хатта етенсе синыфты тамамлағас, Ҡара диңгеҙ буйына "Артек" пионер лагерына ла ебәрҙеләр уны. Уҡытыусы апай һәм ағайҙарҙың иң өмөтлө уҡыусыһы булды. Фотоһүрәте почет таҡтаһынан төшмәне. Уның менән бергә мәктәптә олимпиадаларҙа ҡатнашып, алдынғы урындарҙы алып йөрөй торғайныҡ. Үҙем оҙаҡ йылдар ситтә йөрөү сәбәпле, синыфташтарымдың күптәренең артабанғы яҙмышын белмәй инем. Юғары уҡыу йортон да тамамлаған икән Рәлиф. Әммә, шайтан тарафынан ауыҙлыҡланып, уның ихтыярына ғына бойһоноп йәшәргә мәжбүр ул (хәйер, хәҙер инде мәжбүр ҙә түгел, сөнки үткән ҡыш уны урамда ятып туңып үлеп ҡалған, тип ишеттем).

Радик Өмөтҡужиндың юғарыла әйтелгән бик фәһемле кинәйәһен уҡып сыҡҡандар, моғайын, үҙҙәренең бала сағын, мәктәп йылдарын, уҡытыусыларын иҫкә алғандыр. Ул ғына ла түгел, шул кинәйәне киңәйтергә теләүселәр ҙә барҙыр... Мәктәпте тамамлағанға байтаҡ йылдар уҙып, синыфташтар тормошоноң төрләләгән күреп, электән дә уйлана инем. Мәктәп тормошо һис тә артабанғы йәшәйештең тура сағылышы була алмайҙыр, тимәксемен. Балалар араһында бөгзе уҡытыусыларҙың "Ошо Фәләнов бер нәмәгә лә эшкинмәй..." тигән әрен әленән-әле ишетеп йөрөп тә, хәҙерге ваҡытта бынамын тигән итеп тормош ҡороп йәшәгән синыфташтарымды ғорурлыҡ менән миҫал итеп килтерә алам.

Ирғәле синыфташым хәҙерге ваҡытта районлдарыбыҙҙың береһендә алдынғы агроном. Өлгөлө ғаилә башлығы. Ауылда бай ғына тормош һөрә. Балаларының барыһы ла юғары уҡыу йортон тамамлаған. Араларында хатта фән кандидаты ла бар. "Ә мәктәптә нисек уҡыны был синыфташың?" тип һорағандарға "Насар!" тип кенә яуап бирер инем. Уның хаҡында һәр саҡ уҡытыусыларҙың "Ошо Ирғәле бер нәмәгә лә эшкинмәй..." йә иһә "Бынан ул да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ..." тигән һүҙҙәрен ишетергә тура килә ине. Ысынлап та, Ирғәле класта иң шаяны, "әҙәм боҙоғо" ине. Нисек синыфтан-синыфҡа күсеп барғандыр - ошоғаса ғәжәпләнәм. Әммә хәҙерге көндә ул оло хөрмәткә лайыҡ, абруйлы кеше... Оло ҡыуанысҡа, нәҡ шундай уҡ икенсе синыфташымды ла миҫал итеп килтерә алыуыма шатмын. Һәр саҡ аҡ күлдәктә, галстук тағып, ыҫпай ғына кейенеп йөрөгән, күрешкәндә лә ифрат мәҙәниәтле, әҙәпле итеп һөйләшкән Йәнбирҙе Рәхимйән улын ҡасандыр кластың иң беренсе хулиганы, "икеле тоҡсайы" ине, тиһәң, һис кем ышанмаҫ...

Билдәле сәбәптәр буйынса, ошо синфташтарымды үҙ исемдәре менән яҙмаҫҡа мәжбүрмен. Хатта үҙемдең исемем дә уйлап сығарылған. Әммә беҙ - ысынбарлыҡ.

Ошо мәҡәләмде файҙаланып, уҡытыусы халҡына бер мөрәжәғәтемде еткергем килә. Теге йәки был уҡыусығыҙ хаҡында "Һинән ул да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ, тыуһа ла тормаҫ..." тип алдан күрәҙәләргә әллә ни ашыҡмаһағыҙ ине. Сөнки кемдең кем буласағын тик бер Аллаһ үҙе генә белә... Радик Өмөтҡужиндың фекерен раҫлап, тағы ла шуны әйтмәксемен: тышҡы ҡиәфәтенә, йә иһә уҡыуына ғына ҡарап, уҡыусының киләсәген күҙаллау - ҙур хата. Айырыуса был хаҡта үҙеңдең уйыңды шул уҡыусының күҙенә бәреп әйтеү хилаф эш.

Уҡытыусыларымдың береһе миңә йыш ҡына "Зәбих, һин - маҡтансыҡ..." ти торғайны. Ни өсөн, тип уйлайһығыҙ? Бер мәртәбә яуап биргәндән һуң, уҡытыусының киләһе һорауына ла яуап бирергә теләп, һәр саҡ ҡул күтәреп ултырған өсөн. "Зәбих, афарин! Был һорауға ла яуап бирә алырыңды беләм. Әммә хәҙер башҡаларға ла һүҙ бирәйек", тип әйтә алманымы икән ни ул уҡыусыһы өсөн? Мин ул саҡта ни бары ун бер-ун ике йәштәрҙәге ябай, тырыш бала инем. Оло ғына йәштәге уҡытыусының ана шул "маҡтансыҡ" тип әйтеүе ғәрлегемә тейеп, үҙем илар сиккә етә торғайным. Был уҡытыусының насарыраҡ ҡына өлгәшкән бер улы минең менән бер синыфта уҡыны. Арҡты партала һәр саҡ "шымтайып", бер ҡасан да ҡулын күтәрмәй ултырған шул улы өсөн әллә минән көнләште микән, тип тә уйланыла хәҙер.

Уҡыусылар араһында булған отличник Рәлифтәрҙе күккә сөйөп, ә насарыраҡ өлгәшкән Ирғәле, Йәнбирҙеләрҙе түбәнһетергә ашыҡмаһын ине ҡайһы бер уҡытыусы апайҙар һәм ағайҙар. Хәйер, ул саҡтарҙан алып бик күп йылдар үтте, илде лә үҙгәртеп ҡорҙоҡ. Бәлки, хәҙер ундай күренештәр юҡтыр мәктәптәрҙә, ә?

**Зәбих ҠЫУАНДЫҠОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡорт балы был көндәрҙә Киевта барған умартасылыҡ буйынса "Апимондия-2013" 43-сө Халыҡ-ара конгресында иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Быйыл был конгресс донъяның 70-тән ашыу иле вәкилдәре ҡатнаша. Үткәрелгән конкурстар йомғаҡтары буйынса башҡорт командаһы наградаларҙың тулы комплектын - бер алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙалдар яуланы.

✔Ашхабадта "Китап - хеҙмәттәшлек һәм үҫеш юлы" тип аталған VIII Халыҡ-ара китаптар күргәҙмә-йәрминкәһе тамамланды. Уның йомғаҡтары буйынса конкурста Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Көмәс өй" китабы менән "Балалар китабы" номинацияһында еңеүсе тип танылды.

✔Быйыл Башҡортостанда барлығы 1,1 миллион кешегә грипҡа ҡаршы прививка яһау планлаштырылған. Федераль бюджет аҡсаһына, йәғни бушлай 800 мең кешегә яһаласаҡ, улар иҫәбендә 300 мең бала бар. Төбәктә прививка тәү сиратта мәктәпкәсә йәштәге балаларға, мәктәп уҡыусыларына, медицина хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға, пенсионерҙарға ҡуйыласаҡ. Грипҡа ҡаршы Рәсәйҙә етештерелгән вакциналар сит илдәкенән һис тә ҡалышмай, тип иҫәпләй эпидемиологтар. Вакцинаның уртаса хаҡы - 200 һум.

✔1 октябрҙән Рәсәйҙә көҙгө саҡырылыш башланды. Рәсәй Ҡоралл Көстәренә саҡырыу буйынса Башҡортостан 6500 хәрби хеҙмәткәрҙе оҙатырға тейеш, тип хәбәр иттеләр республика хәрби комиссариатынан. Хеҙмәт итеү ваҡыты үҙгәрешһеҙ ҡала - 12 ай. Үткән көҙгө саҡырылышта Башҡортостандан алты мең йәш егет граждан кейеменән хәрби кейемгә алмаштырғайны.

✔Өфө уҡытыусыларын тәбрикләү тантанаһы булып үтте. Бөгөн баш ҡаланың белем биреү учреждениеларында 12 меңдән ашыу педагогик хеҙмәткәр эшләй. 133 мәктәптә етемеңләгән уҡытыусы белем бирә. Уларҙың ике меңдән ашыуы үҫеп килгән быуынды уҡытыуға ҙур өлөш индергәндәре өсөн наградаларға эйә. 245 кешенең дәүләт наградаһы, почетлы исемдәре, РФ һәм БР ордендары һәм миҙалдары бар

**"Башинформ"дан.**

✓ *11 октябрҙә баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" фестивале ҡатнашыусыларының сығышын тамаша ҡыла аласаҡ.*



БАШ ЙОРТТА

# АСЫҠ ИНЕ...
## ябылды...

**Күпселектең ғүмере "эш - магазин - өй - эш" араһында йүгереп үтә. Ҡайһы саҡта хатта, ҡатын-ҡыҙ әйтмешләй, сәс тарау түгел, күҙгөгә ҡарарға ла ваҡыт етмәй. Ә бит, ныҡлап уйлаһаң, һәр кемдең күңел түрендә генә йөрөткән иң изге, матур хыялдары һаман да осҡонланып, баҙлап ята ла бит, тик тормошҡа ашырға ваҡыт ҡына тапмай.**

Эйе, кемдер рәссам, кемдер музыкант булырға хыялланғандыр. Бәғзе берәүҙәр иһә уҡытыусы һөнәренә ғашиҡ булғандыр ҙа, тик яҙмыш ҡушыуы буйынса бөтөнләй икенсе өлкәлә тир түгәләр. Ләкин кеше ҡайҙа ғына эшләмәһен, ғүмеренең ниндәй генә этабында булмаһын - йәш баламы ул, үҫмерме, дәрте ташып торған еләк кеүек сағымы, әллә инде олпат шәхесме - барыбер ҙә күңеләндә уның матурлыҡҡа, сәнғәткә, әҙәбиәткә һөйөү йәшәй. Хатта ул ниндәйҙер кимәлдә үҙенең тормошҡа ашмаған хыялын кемдәндер тормошҡа ашҡан хыялында күреп булһа ла шатлыҡ кисерә, һоҡлана.

Күптән түгел генә баш ҡала халҡы Конгресс-холл бинаһы эргәһендә Башҡортостанда тыуған, әлеге ваҡытта сит илдә, Рәсәйҙең төрлө уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән сәнғәт оҫталарының асыҡ һауалағы сығышына шаһит булып, илһамланып йөрөгәйне. Унда барлығы 200 башҡарыусы сығыш яһап, ун меңдән ашыу тамашасы йыйылғайны. Тап шул мәлдә киләһе йылда ошо уҡ урында "Симфония төнө"н уҙғарыу ныҡлы планлаштырылып, унда сығыш яһаусыларҙың да, тамашасыларҙың да күпкә артығыраҡ булыуы көҙәлләнә ине. Быйыл икенсе йыл рәттән "Уфанет" компанияһы тәбиғи амфитеатрҙа үткәргән асыҡ һауала кино күрһәтеүҙе ойоштороу ҙа был тәжрибәнең генә түгел, ошо урындың да баш ҡала халҡы күңеленә хуш килеүен раҫлағайны.

Әммә "Симфония төнө"н уҙғарыу планының тормошҡа ашмауы ла ихтимал. Сөнки бында киләһе йылдан төҙөкләндереү эштәре башланып, унда халыҡҡа ял итеү, саф һауала йөрөү зонаһы булдырмаҡсылар, ағастар ултыртмаҡсылар. Был, бер яҡтан, зонаны йәшеллеккә күмһә, икенсе яҡтан, битләүҙе нығытасаҡ.

Ҡала округы хакимиәте етәкселәре күҙлегенән сығып ҡарағанда, әлбиттә, бында парк зонаһы булдырыу ғәмәлгә ярашлыраҡ. Сөнки айырым тематика буйынса ойошторолған мәҙәни саралар күп түгел һәм улар йылына бер-ике тапҡыр ғына уҙғарыла. Ә халыҡ көн дә ял итергә, һауала йөрөргә теләй. Ләкин, кем әйтмешләй, икмәк менән генә тамаҡ туймай, күңел ихтыяжының да, рухиәттең дә "туҡ" булыуы мөһим.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**1 октябрҙә Парижда ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында үҙенсәлекле "Урал батыр" эпосын һаҡлау һәм "Башҡорт Уралы" тәбиғи объектын Бөтөн донъя мираҫы исемлегенә индереү буйынса түңәрәк ҡорҙар үтте. Уның эшендә ЮНЕСКО-ның мәҙәниәт буйынса генераль директоры урынбаҫары Франческо Бандарин һәм ЮНЕСКО-ның экология һәм ер тураһында фән буйынса бүлек директоры Хан Чюнли ҡатнашты.**



# ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК...
## үҙебеҙҙе лә күрһәттек!

ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы үҙәгенең тәбиғи мираҫ буйынса программа белгесе Ги де Бонэ беҙҙең ойоштороу һәм күргәҙмә материалдарын баһалап: "Рәсәй Федерацияһының Бөтөн донъя мираҫы исемлегенә күп объекттар индерелгән. Бөгөн Башҡортостан тураһында күберәк белеү мөмкинлегенә эйә булдыҡ һәм уның исемлеккә өҫтәмә объекттарҙы индереү инициативаһы менән сығыуы аптыратмай", - тине һәм материалдарҙы әҙерләүсе ғалимдар төркөмө төплө эш башҡарыуын билдәрҙе.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова халыҡ-ара ойошманың экспертары менән артабанғы эшмәкәрлеккә ҡағылышлы мәлдәргә айырым туҡталды.

-Иң юғары кимәлдәге эксперттар үҙ ҡарашын белдерҙе. Ғилми өлөштә, яҡын арала үткәрелергә тейешле саралар исемлеге лә комплексы ҡаралды. Фекер алышыуҙа ҡатнашыусы эксперттарҙың барыһы ла беҙҙең объекттарҙың юғары кимәлдәге әҙерлеген билдәләне һәм ошо эште нисек дауам итеү буйынса үҙҙәренең тәҡдимдәрен еткерҙе, - тине ул.

Башҡортостан инициативаһының әһәмиәтлеген Һәйкәлдәрҙе һәм иҫтәлекле урындарҙы һаҡлау буйынса Халыҡ-ара советтың Рәсәй дәүләт комитеты президенты Игорь Маковецкий ҙа билдәләне.

- Ҡая таштарындағы яҙыуҙар - беҙ тоймаған һәм ахырынаса аңлап етмәгән боронғо мәҙәниәтебеҙ. Бында яҙмалар 17 мең йыл буйы һаҡланған. Шул уҡ ваҡытта Шүлгәнташ таш ҡаяларында яҙыу булған мәҙәниәт кенә түгел, буфер зонаһы менән берлектә федераль тәбиғи ҡурсаулыҡ һәм ЮНЕСКО-ның буфер ҡурсаулығы. Йәғни бында үҙенең составы һәм боронғолоғо буйынса иң яҡшы комплекс.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Парижда ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Илселегендә, Рәсәйҙең Фән һәм мәғариф министрлығында, ЮНЕСКО эштәре буйынса Комиссияһы менән Башҡортостандың халыҡ-ара ойошма менән хеҙмәттәшлегенең 15 йыллығына арналған "Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы" тип аталған оло сара тамамланды. ЮНЕСКО ойошмаһының цивилизация, мәҙәниәт, мәғариф һәм фән тигән һүҙҙәр менән йәнәш килеүен, ошо ҡиммәттәрҙең бар нәмәнән өҫтөн тороуын бер тауыштан раҫлауын иҫәпкә алғанда, был хеҙмәттәшлектең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ икәнен аңларға булалыр. Әлегә сара ЮНЕСКО менән Башҡортостан араһындағы эшлекле бәйләнештәрҙе тағы ла нығытыр, тип ышаныла.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШ ҠАЛАҒА...
## байрам килә

**Инде традицияға әүерелгән Республика көнө Өфөлә 10 октябрҙә, республика һәм ҡала округы хакимиәте етәкселегенең Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу тантанаһынан башланасаҡ.**

Шул уҡ көндә Ҡала мәҙәниәт һарайында "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" тип аталған профессиональ муниципаль коллективтарҙың фестивале асыласаҡ. Унда ШОС һәм БРИКС ағза-илдәренән һәм халҡы миллиондан ашыу булған ҡалаларҙан барлығы 13 ижади коллектив (300-ҙән ашыу кеше) ҡатнашасаҡ. Улар: Мирославов исемендәге Волга дәүләт рус халыҡ хоры (Һамар), "Любава" халыҡ йыры ансамбле (Түбәнге Новгород), "Ижевск" муниципаль хореография ансамбле, "Ромэн" муниципаль йыр һәм бейеү ансамбле (Пермь), "Угол зрения" заманса бейеүҙәр театры (Улан-Удэ), "Забава" рус йырҙары ансамбле (Екатеринбург), "Гранд-Па" хореография коллективы (Киров), "Кустанайские зори" ансамбле (Ҡаҙағстан), Үзбәкстандың һорнайсылар һәм ҡарнайсылар ансамбле, Ҡырғыҙстан һәм Ҡытай халыҡ республикаларынан хореография коллективтары, шулай уҡ Өфөнән "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле. Программала шулай уҡ ижади осрашыуҙар, мастер-кластар, баш ҡаланың төрлө майҙандарында сығыштар ҡаралған.

Шул уҡ көндә "Визуал" Өфө художество фотографияһы оҫтаханаһының "Өфө - ижади ҡала" фотокүргәҙмәһе күрһәтеләсәк.

11 октябрҙә көндөҙгө сәғәт өстән киске етегә тиклем баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" фестивале ҡатнашыусыларының сығышын тамаша ҡыла аласаҡ.

Шулай уҡ байрам саралары ҡаланың барлыҡ райондарында ла үтәсәк. Мәҙәниәт учреждениеларында балалар һүрәттәре, китаптар, музей экспонаттары күргәҙмәләре ойоштороласаҡ, төрлө экскурсиялар һәм башҡа тематик саралар уҙасаҡ. Спорт майҙансыҡтарында спорт мәктәптәрендә шөғөлләнеүселәрҙең күргәҙмә сығыштары ойоштороласаҡ. Балаларға өҫтәмә белем биреү учреждениеларында, балалар музыка һәм сәнғәт мәктәптәрендә байрам концерттары күрһәтеләсәк.

Баш ҡаланың вокал һәм хореография коллективтарының сығыштарын тамашасылар УМПО, С. Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайҙары, Дим районының, "Беренсе Май", Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял парктарында ҡарай аласаҡ.

Байрам көнөндә йәмәғәт транспорты иртәнге алтынан төнгө бергә тиклем йөрөйәсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1 октябрҙән Башҡортостанда "комендант сәғәте" урындағы ваҡыт менән киске 10-дан алып иртәнге 6-ға тиклем дауам итәсәк. "Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы БР законына ярашлы, 17 йәше тулмаған балаларға төндә ата-әсәһеҙ йәмәғәт урындарында йөрөү тыйыла. Раҫланған ҡағиҙәләрҙе боҙған осраҡтарҙа 500-1000 һум күләмендә административ штраф һалынасаҡ. Ҡабатлан административ хоҡуҡ боҙоу осрағында бер мең һумдан алып ике мең һумға тиклем штрафҡа тарттырыласаҡтар. Төнгө ваҡыт октябрҙән апрелгә ҡәҙәр 22 сәғәттән иртәнге 6-ға тиклем, ә май айынан сентябргә тиклем - 24 сәғәттән иртәнге 6-ға хәтлем.

✓"Башҡортостанда байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһында" БР Законына ярашлы, 11 октябрь - Республика көнө - Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнө байрам көнө булып тора. Бынан тыш, республика Хөкүмәте бойороғо менән 2013 йылда 15 октябрь - Ҡорбан ғәйете байрамы көнө тип иғлан ителде.

✓"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы абруйлы "Дитятко" Халыҡ-ара балалар телевидение фестивалендә бер юлы ике еңеү яулаған. "Прегад.net" фильмы "Балалар студияһының иң яҡшы документаль фильмы" номинацияһында еңгән. Ә Егор Антипин "Иң яҡшы алып барыусы" тип танылған. Ул "Тау-тау хәбәр"ҙе алып бара. Конкурстың абруйлы наградаһын "Телешко" балалар телевидение мәктәбе лә яулаған. "Перекличка" программаһы журналистары иң яҡшы тележурналистар тип табылды.

✓8 октябрҙә Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең концерт залында (Ә.-З. Вәлиди урамы, 34) "Бер ҡанатым - шиғыр, икенсеһе - йыр " тигән әҙәби-музыкаль кисә үтә. Унда танылған шағирҙар һәм яҙыусылар Ҡәҙим Аралбаев, Риф Мифтахов, Таңсулпан Ғарипова, Сабир Шәрипов, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Тамара Искәндәриә, Зөһрә Фәйзуллина ҡатнаша. Кисәне Лариса Абдуллина менән Салауат Вахитов алып бара. Әҙиптәр шиғырҙар һөйләйәсәк һәм... йырлаясаҡ, музыка ҡоралдарында уйнаясаҡ. Кисә 19:00 сәғәттә башлана.

ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА

# МИНЕҢ ИНАНЫУҘАРЫМ

**Мин һәр бала һәләтле икәненә ышанам. Тик уҡытыусымын тигән уҡытыусы уны күрә белергә, асырға, үҫтерергә тейеш. "Тормошта һеҙ кем генә булһағыҙ ҙа, белем, хәтер, зирәклек, ныҡышмалыҡ, бөхтәлек, кұҙәтеүсәнлек, түҙемлелек, ижади фараз һәм логик фекерләй, анализлай, ҡаршы ҡуя һәм һығымта яһай белеү һәр ваҡыт кәрәк буласаҡ". Был һүҙҙәрҙе индивидуаль һәләтте ижади үҫтереү методикаһы авторы Г.С.Альтшуллер әйткән.**



Баланың талантын асыу, күңелендә ижади осҡон ҡабыҙыу - уҡытыусы өсөн күп йыллыҡ, системалы һәм тынғыһыҙ хеҙмәт. Һәм был хеҙмәт миңә шул тиклем оҡшай. Алға маҡсат ҡуйып, уға аҙымлап ынтылһаң, үҙеңде ныҡышмалы рәүештә бәләкәй еңеүҙән оло маҡсатҡа алып бара алһаң, һәләтте үҫтереү шул була. Һәләтле балалар менән эште дөрөҫ ойошторғанда, тыумыштан килгән зирәклек һәләткә әйләнә, ул үҙен төрлө яҡлап аса. Уңышҡа өлгәшә. Ә бер уңыш икенсеһенә илтә. Уңышлы кеше - бәхетле кеше. Мин ҡулымда бәхет асҡысы тотоп торам. Берәү генә лә түгел, ә бик күп улар! Сөнки мин - уҡытыусы. Ваҡытында дөрөҫ йүнәлеш биреп ебәрә алһам, бала минең ҡулымдан Бәхет асҡысы ала. Мин быға шул тиклем инанғанмын.

Үҙемә ваҡытында дөрөҫ йүнәлеш биреп, ошондай инаныстарға килтергән кешеләргә лә оло рәхмәт менән иҫкә алам. Иң тәүгеһе - ауылдың беренсе комсомолы, беренсе коммунисы, беренсе уҡытыусыһы булған өләсәйем. Минең өсөн ул ап-аҡ сәсен аҡ яулығы аҫтына йыйнаҡ ҡына йыйып, зәңгәр ерлеккә аҡ биҙәк төшкән күлдәк кейгән ҡәҙерле өләсәй булды. Ул миңә бөтмәҫ хазина: халыҡ әкиәттәре, йыр, шиғыр, таҡмаҡ, бәйет, тарих һөйләп ҡалдырҙы. Салауат педагогия училищеһын тамамлап, ауылыма эшкә ҡайтҡас, фатиханы биреп, изге теләк менән тәүге эш көнөнә оҙатты. Ә ҡышҡы бер көндә мәктәпкә минең уҡыусыларыма ҡунаҡҡа килде. Класс бүлмәһенең ап-аҡ мейесе эргәһенә урындыҡҡа ултырҙы ла, ҡулына бәйләмен алды, йомғаҡ тәгәрәтеп, әкиәт һөйләне, бәйетен дә әйтте, йырын да көйләне. Балалар уға әйәреп йырланы ла, бейене лә... Бына шунда аңланым мин кеше үҙ телендә йыр-моң тыңлаһа, аҡыллы һүҙ ишетһә, донъя матурлығын күңел күҙе менән күрһә генә күңел ялы ала, күңелен сәләмәтләндерә икәнен. Ошо ваҡытта күңелдә илһам тыуа, талант ҡанатын ҡаға. Ҡәҙерле өләсәйем күңел байлығын миңә генә түгел, уҡыусыларыма ла күсерҙе. Тәүге уҡытыусым Мәғфиә Насибулла ҡыҙы Әхмәҙуллинаның да һәр һүҙе алтын инә. Ошо ике ҡәҙерле кешеләремә арнап, дүрт йылға бер "Өләсәйем йомғағы" тигән кисә ойоштораm мәктәптә. Һәр бала өләсәләре менән килә. Тамашаны балаларҙың һәләтен күрһәтер майҙанға әйләндерәбеҙ.

Һәр дәрестә уңыш ситуацияһы тыуҙырып, баланың күңелен үҫтереү - уның һәләтен асыуға бер аҙым. Рифма бирһәң, шиғыр теҙелә. Матур һүрәт элһәң, һөйләмдәрҙән хикәйә була. Береһен-береһе тыңлап, матурлыҡҡа ынтылған кескәй шәхескә ҡарап ҡыуанаһың. Һәр матур һөйләмә шатландыра. Баланың ижади үҫеше күренә. Проблемалар ҙа тыуып тора. Проблеманы урап үтмә, тип өйрәтәм уҡыусыларыма. Мәрйәм Бураҡаеваның ошо һүҙҙәрен өлгө итеп килтерәм: "Бер генә проблеманы ла урап үтмә. Урап үткән йәки аша сыҡҡан проблема барыбер килеп сығасаҡ һәм һиңә ҡамасаулаясаҡ. Проблема үҙенән-үҙе бар булған кәртә түгел. Һәр уңыштың башында - мотлаҡ була торған тормош һикәлтәләре. Уны шулай күҙ алдына килтерергә кәрәк. Һинең тормошоңдағы бөтә уңыштарың ҙур бер һауыт эсендә. Ә уның ҡапҡасы бар һәм ҡапҡас ныҡ итеп ябылған. Шул ҡапҡасты астыниһәң, һауыттың эсендә - тағы бер нисә һауыт. Уларҙың да һәр береһе ҡапҡаслы. Һәр береһенең эсендә уңыш бикләнгән. Ҡапҡасын асһаң- уңышҡа юлыҡаһың. Аса алмай, урап үтһәң, өлөшөңә тейгән көмөштән мәхрүм ҡалаһың. Әммә ҡапҡастары ла төрлөсә ябылған. Ҡайһыныһы тиҙ асыла, ҡайһыныһын асыу өсөн ярҙамсылар кәрәк. Туғандарың, дуҫтарың, ололар менән кәңәшләш. Кәңәшле эш тарҡалмаҫ..."

Мин ошоларға инанып йәшәйем һәм эшләйем...

**Гүзәлиә ЙӘНТҮРИНА, башланғыс класс уҡытыусыһы. Миәкә районы Тамьян-Таймаҫ урта мәктәбе.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## УРАМДА ТОРОП ҠАЛМА!

**Фатиримды һатыу-һатып алыу килешеүе буйынса һеңлемдең улына күсерҙем. Килешеү исем өсөн генә төҙөлдө, асылда ул миңә бер тин дә түләмәне. Суд аша фатиримды кире ҡайтара аламмы? Сөнки килешеү ғәмәлгә ингәндән һуң ул минең менән аралашыуҙан туҡтаны. Мине урамға ҡыуып сығарып ебәрмәгәйе, тип тә ҡурҡа башланым әле...**

- Ысынлап та, туғанығыҙ фатир хужаһы булараҡ, уны һатып та ебәрә аласаҡ, ә һеҙ, әгәр ҙә килешеүҙә фатир менән ғүмерлеккә файҙаланыу хоҡуғығыҙ күрһәтелмәгән булһа, урамда тороп ҡалыуығыҙ ҙа бар. Һатыу-һатып алыу килешеүенә дәғүә белдереү бик ҡатмарлы мәсьәлә. Килешеүҙә түләү хаҡында нимә әйтелеүе бик мөһим. Шул уҡ ваҡытта, туғанығыҙҙан, йәнәһе лә аҡса алдым, тип расписка бирмәүегеҙ ҙә мөһим. Әгәр ҙә килешеүҙә һеҙ был документҡа ҡул ҡуйырҙан алда йәки аҙаҡ, аҡса алды, тип күрһәтелә ҡалһа, аҡса алманым, тип иҫбатлай алмаясаҡһығыҙ, сөнки килешеү бының киреһен дәлилләйәсәк. Өҫтәүенә, бая әйтелгәнсә, ҡулығыҙҙа аҡса алыу тураһында расписка ла булһа, һеҙ бер ни ҙә иҫбатлай алмаясаҡһығыҙ. Ә инде, бәхеткә күрә, документта аҡсаның аҙаҡ түләнәсәге тураһында әйтелһә һәм һеҙҙә берниндәй ҙә расписка күренеп тормаһа, шул осраҡта ғына һеҙ килешеүҙе өҙөп, фатирығыҙҙы кире ҡайтара алаһығыҙ. Шуныһын да онотмағыҙ: юллау биреү мөҙҙәте - өс йыл, ошо ваҡытты үткәреп ебәрә күрмәгеҙ.

## БҮЛӘК ИТЕҮ ЫШАНЫСЛЫРАҠ

**Өләсәйем миңә фатирының икенән бер өлөшөнә васыят яҙҙы. Ҡартатайым үҙ өлөшөн ике туған һеңлемә яҙҙырғайны, вафат булғас, мираҫсы үҙ хоҡуғына инде. Шул уҡ ваҡытта өләсәйем менән әсәйем, пенсионерҙар булараҡ, мотлаҡ өлөштәрен алды. Өләсәйемә хәҙер ни эшләргә: васыятын яңынан яҙырғамы, әллә бүләк итеү килешеүе төҙөргәме? Ул миңә мираҫ иткән өлөшкә тағы ла кемдеңдер дәғүә итеүен теләмәй.**

- Был осраҡта бүләк итеү килешеүе ышаныслыраҡ булыр. Ул үҙ өлөшөн (милкендә булған һәм мираҫҡа тейгән) әле үк һеҙгә бүләк итә ала, ләкин тәүҙә ул иренән ҡалған мираҫ өлөшкә хужа булырға тейеш. Ошо хаҡта ҡулына документ алғандан һуң ғына бүләк итеү килешеүе төҙөй алаһығыҙ. Был килешеүҙе төҙөү өсөн нотариусҡа барыу мотлаҡ түгел, уны яҙма рәүештә ғә данала баҫтырып, рәсми рәүештә теркәтеү өсөн өләсәйегеҙ менән икәүләп үҙегеҙ йәшәгән ҡала йә районындғы Теркәү, кадастр һәм картография дәүләт федераль хеҙмәте идаралығына барығыҙ.

## КҮПКӘ ӨМӨТЛӘНЕП, АҘҘАН ЯҘМА

**Баламдың атаһы ай һайын ҡулдан 5 мең һум алимент түләй. Белеүемсә, ул ике урында эшләй, ә эш хаҡы бәләкәй күренә. Алимент күләмен арттырыу өсөн миңә ни эшләргә?**

- Судҡа мөрәжәғәт итеп, килеменең дүрттән бер өлөшөнә дәғүә итә алаһығыҙ, әлбиттә. Ләкин алимент уның әлеге рәсми күрһәтелгән эш хаҡынан сығып билдәләнәсәк бит. Уның ведомость буйынса күрһәтелгән сумманан күберәк аҡса алып эшләүен иҫбатлай алырһығыҙмы һуң? Әгәр баланың атаһы ысынлап та ике урында эшләй һәм даими килем алмай икән, алиментты ҡәтғи суммала тәғәйенләүҙе талап итә алаһығыҙ. Ләкин был осраҡта ла алимент күләме ҡулдан алынған сумманан күберәк булырына ышаныс юҡ. Судҡа биреп, алиментты арттыра алыуығыҙ бик икеле. Шуға күрә, әле түләнгәнгә риза булырға кәрәктер, бәлки? Уныһын түләүҙән ҡасып йөрөүселәр ҙә күп бит әле...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Балаятҡы муйынтығы эрозияһы

❖ 1 банка гәрсисте 1 биҙрә ҡайнаған һыуҙа болғатып, юрғанға төрөнөп, 1 сәғәт 20 минут уның боҫонда ултырырға.

❖ 2,5 грамм мумиены 100 мл һыуға ҡатнаштырып, тәнгәләккә тампон эшләргә.

❖ 3 ҡалаҡ ваҡланған монгол сәйе (бадан) үләненең тамырын 1 стакан һыуҙа яртыһына ҡалғансы ҡайнатырға. Ошо экстрактты стакан ярым ҡайнатып, йылымыс хәлгә тиклем һыуытылған һыу менән ҡушырға. Шулай уҡ көн һайын йыуыныырға һәм ашар алдынан 30 тамсы тәнәтмәне 1 ҡалаҡ һыу менән болғатып эсер өсөн ҡулланырға.

### Аяҡ һөйәге (оро) үҫһә

Йомортҡаны стаканға һалып, 100 грамм ҡаты шарап һеркәһе ҡойорға һәм 3-4 көн ҡараңғы урында тоторға, был ваҡыт эсендә йомортҡаның тышы ирергә тейеш. 4-5 көн йомортҡаны һеркәнән алырға, ағын түгергә, ә һарыһын һауытҡа һалып, күпергәнсе туғырға, йомортҡа тышы ирегән һеркәне өҫтәргә, 100 грамм скипидар ҡушырға. Һеркәне лә, скипидарҙы ла яйлап, болғата-болғата өҫтәргә. Һуңынан килеп сыҡҡан ҡатнашманы ҡара төҫтәге быяла һауытҡа һалырға, һалҡын урында тоторға. Дауаны кисен, түбәндәгесә эшләргә. Ярты литр ҡайнар һыуға дингеҙ тоҙо һалып болғатығыҙ. Ябай тоҙ ҙа ярай. Йөн сепрәкте манып, ауыртҡан урынды ышҡырға, ҡоро таҫтамал менән һөртөп, ошо тәнәтмәне һөртөргә. Ҡоро йөн сепрәк, ҡағыҙҙан йылытыусы компресс ҡаплап, ойоҡ кейергә. Иртән генә сисергә. 7-10 тапҡыр ҡабатларға.

### Атеросклероз

❖ Кейәү үләне (чабрец). Был үләнде сәскә атҡан сағында йыялар. Атеросклероздан бик файҙалы. 5 грамм үләнгә 500 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын яҡшылап ябып, 40 минут төнәтәһең. Ҡапҡас япмаһаң, эфир майҙары осоп бөтә. Кейәү үләне - көслө сара, уны аҙнаһына 2-3 тапҡырҙан артыҡ ҡулланырға ярамай! Ул тынысландыра, тирҙе ҡыуа, бактерицид тәьҫиргә эйә, баш мейеһе ҡан тамырҙарының ҡапыл ҡыҫылыуын бөтөрә. Үләндең латинса атамаһы "тимус" - "көс". Борон ниндәндәр ныҡ ҡурҡҡан балаларҙы уның төтөнө менән ыҫлағандар.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Эс-бил ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Эс име.** Дим буйы әбейҙәре, кешенең эсе ауыртһа, орсоҡ, ҡайраҡ, тотонолмаған энә, уҡлау менән төрткөләп, "һуҡҡылап" имләгәндәр, һуҡҡылағанда һанау ҙа ҡулланылған:

*1, 2, 3 - осһон,*
*1, 2, 3, 4, 5 - бөтһөн,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 - елгә китһен,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 - туҙһын, бөтһөн!*

**Ҡорһаҡ күбеүҙе имләү.** Кешенең ҡорһағы күпһә, ҡуянбаш менән төрткөләп имләгәндәр. Им-том иткәндә боронғо доға ла уҡығандар.

**Ашҡаҙан сиренә күгәрсен ите.** Ашҡаҙан ауыртһа, күгәрсен ите ашатҡандар. Ашағанда ошо әпсенде әйткәндәр:

*Имем, имем шул булһын,*
*Ашҡаҙаным йүнәлһен.*

**Ҡан ҡоҫоуға им-том.** "Әүәле заман Күбәләк ырыуынан бер ҡыҙ ҡатай яғына кейәүгә сыҡҡан. Бөтә йолаларҙы үткәреп, туй яһап, оҙатҡандар. Тик күпмелер ваҡыт үткәс, килен ауырый башлаған, ашаған ашы һеңмәй икән, ҡоҫа ла ҡоҫа. Аҙаҡ ҡан ҡатыш ҡоҫа башлаған. Төрлөсә имләп ҡарайҙар икән, тик һис килешмәй. Килен хәлһеҙләнгән. Шул ауылға ҡунаҡҡа Тиләүҙән бер әбей килгән. Ул ишетеп: "Был киленгә иш-ҡуш кәрәк, уны һыу эйәһе тота", - тигән. Ҡыҙға тыуған яғынан һыу килтереп эсерергә кәрәк, тигән. Һыу алып килеп эсергәндәр, хәле һәйбәтләнгән кеүек булған, әммә ауырыуы бөтмәгән, ти. Килен төҙәлмәгәс, кейәү менән әбей Күбәләк иленә барып, Оло һәм Бәләкәй Ҡыҙыл йылғалары һыуын бергә ҡушып, ун ике ижау һыу алып киләләр һәм ҡайтҡас, шуға Инйәр һыуын ҡушалар. Шунан был һыуҙы һамаҡлап, ҡалаҡ менән ҡыҙға эсергәндәр:

*Ҡыҙыл һыуҙары ҡуш-ҡуш.*
*Инйәр һыуға иш-иш,*
*Тәнгә булһын хуш-хуш,*
*Ҡорт ташты тиш-тиш!*

Ҡалаҡты килендең аяҡ-ҡулын, билен, муйынын, башын уратып биргәндәр. Ҡушылған һыуҙы эскәс, килендең күҙе асылып киткән, ҡоҫоуы туҡтаған, ашай башлаған. Шулай итеп, "Иш-ҡуш йолаһы" менән килende имләп алып ҡалғандар", - тип һөйләне Миндәктән М.Ғиззәтуллина.

**Бөҫер ташы.** Бөҫер булһа, хәҙрәттән таш өшкөртөп алып, шуның менән бөҫерҙе төрткөләп бөтөргәндәр. Төрткөләгәндә доғаһын да уҡығандар.

**Бөҫер ташын ҡырып ашатыу.** "Бөҫер булһа, олатайым бөҫер ташын ҡырып ашата ине. Ул ташты таңда бер тауҙан барып ала торғайны. Бөҫерле кешегә шул ташты ҡырып, өшкөрөп бирә ине", - тип һөйләне Аҡъярҙан З. Аҡбалина.

**Сынаяҡ ташында яҙыу.** Сынаяҡ аҫтына Аятел көрси доғаһын ҡарағат йә еләк һыуы менән яҙалар. Ул бөтә сирҙәрҙән ҙур файҙа.

Көмөш ҡара менән дә сынаяҡ аҫтына яҙалар һәм шул сынаяҡҡа һыу һалып эсерәләр. Шуның менән бөҫерҙе бөтөрәләр.

### Быума сиренән им-том

Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, быума - эпилепсия ауырыуының эйәһе. Ул ғәҙәттә кешене тота, тиҙәр. Халыҡ араһында быума тотоу урынына "үҙенеке тотҡан" тигән һүҙбәйләнеш киң таралған. Бының нигеҙендә, ауырыуҙың исемен әйтергә ярамай, тигән ышаныу ята. Быума тотҡанда, тыны быуылып, кеше ҡапыл ҡолап китә. Унының ауыҙ-моронан күбек килә. Ул тартыша, тыпырсына башлай. Бер аҙ ваҡыт үткәс, быума ебәрә икән.

Ышаныуҙар буйынса, быуманы им-том менән генә бөтөрөп була. Башҡорттарҙың төрлө этнографик төркөмдәренән йыйылған материалдар күрһәтеүенсә, халыҡта әле лә бер нисә имләү ысулы һаҡлана.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун етенсе һабаҡ: "Кемде нығыраҡ яратаһың?"




**Ҡайһы бер өлкәндәрҙең балаға ошондай һорау менән мөрәжәғәт иткәнен ишетергә тура килгеләй. Кемде нығыраҡ яратаһың? Атайыңдымы, әсәйеңдеме? Ҡайһы апайыңды (йәки ағайыңды) нығыраҡ яратаһың? Өләсәйҙәреңдең ҡайһынығын нығыраҡ яратаһың?**

Бала ошондай тупһыҙ һорауҙарҙан аптыранып ҡала. Уның бәләкәй генә мейеһен төрлө уйҙар-икеләнеүҙәр борсой башлай.

Ысынлап та, мин кемде нығыраҡ яратам? Кемделер нығыраҡ йәки әҙерәк яратырға тейешме икән кеше? Шулай кәрәкме икән?

Ә яратыу нимә була? Ни өсөн нығыраҡ йәки әҙерәк яратырға кәрәк? Бәләкәй туғанымды гел күтәрәләр, әсәйем уны алдына ултыртып ашата. Уны нығыраҡ яраталармы?

Һорау биргән кеше (сит кешеме, туғанымы) үҙе кемде нығыраҡ ярата икән? Атайымдымы, әллә әсәйемдеме? Мин кемде тип әйтһәм, ул асыуланмаҫ икән? Әсәйемде, тип әйтһәм, ә ни эшләп атайыңды яратмайһың, тип асыуланырмы икән? Атайымды, тиһәм, ә ни эшләп әсәйеңде түгел, тип әйтерме икән?

Сабый йөрәге аша йәшен тиҙлеге менән ошондай һорауҙар үтә һәм ул күҙҙәрен мөлдөрәтеп, һорау биреүсе кешегә баға. Нимә тип әйтергә?

Ә һорау тағы ҡабатлана. Ни эшләп өндәшмәйһең? Әллә икеһен дә яратмайһыңмы? Әсәйең бит һинә шуны-шуны эшләне. Атайың тыуған көнөңә шул бүләкте алып бирҙе. Өләсәйең, апайың... Һәм башҡалар теҙелеп китә.

Ә-ә-ә, бына нимә була икән яратыу. Кеше нимәләр эшләһә, уны яратырға кәрәк. Кемдер минең өсөн күберәк яҡшы нәмә эшләһә, уны нығыраҡ яратырға кәрәк икән, тип уйлай башлай бала. Ә һорау биреүсе кешене күрәлмаҫ сиккә етә. Улай ғына ла түгел, үҫеп еткәс тә һорау тыуҙырған төрлө тойғолар арҡаһында ул кешегә нәфрәт тойғоһо һаҡланасаҡ.

Ошондай һорау биргән өлкән кеше сабый йөрәгенә ниндәй яра һалғанын уйлап та бирмәй. Ә балала быndай һорау "алдап ҡарау" тигән насар холоҡтоң йәки "яратыу - ул кеше ниҙер эшләһә, шуға тейешенсә хаҡ менән яуап ҡайтарыу", тигән хата төшөнсәнең яралаыуына сәбәпсе була. Шуны онотмаһағыҙ ине һеҙ, өлкәндәр.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ФЕКЕР ҠОРО*

# ТЕЛДЕ ҺАҠЛАУ...

## милләтте һаҡлау ул

**Мин башҡорт теле уҡытыусыһы. Милләтебеҙҙең, бигерәк тә туған телебеҙҙең киләсәге тураһында бик күп уйланырға тура килә. Сөнки иңдә тормош тәжрибәһе бар, күңелдә милли рух йәшәй. Бөгөн башҡорт теле мәктәптәрҙә туған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та ҙур ҡыйынлыҡ менән уҡытылыу хоҡуғына өлгәшә икән, бының сәбәптәре бик күп: уйланылмаған (әллә бик нык "уйланылған") хөкүмәт ҡарарҙары, үҙебеҙҙең мөсһөҙлөк, моңһоҙлоҡ.**

Быйылғы яңылыҡтарҙы ғына алайыҡ: уҡытыуҙың ике төрлө база планының береһен һайлап алыу директорҙар ҡарамағына ҡайтарып ҡалдырылды. Аптырағандан, хатта башҡорт гимназияһы директорҙары ла башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү планын һайламай, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу мөмкинлеген биргән планды һайлай (мәҫәлән, Димдәге 102-се башҡорт гимназияһы). Сөнки, хатта башҡорт мәктәптәре булһа ла, уларҙа ла туған телде өйрәнергә теләүселәрҙе табыуы ҡыйын, һәм был база планы иң кәмендә 1-2 уҡытыусыны ғына эш менән тәьмин итеү мөмкинлеген бирә. Ә мәктәп башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы һайлаһа, ул башланғыс синыфтан башлап уҡытыла, йәғни күберәк уҡытыусы эш менән тәьмин ителә.

Башҡорт телен уҡытыуҙы шундай шарттарға ҡуйыу махсус ойошторолған кеүек: башҡорт халҡын һаман да теҙ сүктереү, хәҙерге заман термины менән әйтһәк, хәйләле, йәшертен дискриминациялау бара һымаҡ. Ошондайыраҡ фекер әйтһәң, "Һеҙ бит үҙ телегеҙҙә һөйләшмәйһегеҙ, һеҙ бит үҙегеҙ башҡорт гәзиттәрен алып уҡымайһығыҙ", тип ауыҙҙы ябалар. Бына шулай: беҙгә ғәфләт йоҡоһонан уянырға кәрәк. Һәр рухлы башҡорт бер генә бөртөк милләттәшен яҙыҡ юлдан ("яҙыҡ юл" тигән төшөнсәгә мин эскелек һәм башҡа хәүефтәр менән бер рәттән, туған телебеҙгә битарафлыҡты, сит милләттәр менән никахлашыуҙы ла индерәм) ҡурсалауға өлгәшһә лә, оло файҙа була, тип иҫәпләргә була.

Башҡорт теле дәресе мәлендә кластарҙы төркөмгә бүлеп уҡытыу буйынса ла аяҡ салыу бара икәнен әйтмәү ярамаҫ. Аксаков исемендәге гимназияла, мәҫәлән, 30 уҡыусы уҡыған кластарҙы төркөмдәргә бүлмәгәндәр, тик 35 уҡыусы булған ике класты ғына бүлгәндәр. Әммә инглиз теле, ниндәй сифатта уҡытылһа ла, кластар төркөмгә бүленә. Тик үҙебеҙҙең ғәзиз туған телебеҙ генә төрлө яһалма ҡыйырһытылыуҙарға дусар ителә. Ниндәйҙер аңлашылмаған, рухты һындырыуға йүнәлтелгән сәйәсәт!..

Бөгөн оптималләштереү башҡорт теле иҫәбенә алып барыла, тип әйтһәң дә дөрөҫ булыр. Ауылдарҙы эреләтеү тип аталған яман күренеш күпме ваҡ башҡорт ауылдарының башына етһә, бөгөнгө оптималләштереү тағы ла башҡорт ауылдарына һөжүм итә, шул арҡала мәктәптәр ябыла.

Башҡорт милләте халыҡ булып һаҡланһын өсөн беҙгә "Ярышта үҫеш" юлын һайлау мотлаҡ. Мәҙәниәт өлкәһендәге ярыш-конкурстар, "Байыҡ" бейеү, "Башҡорт йыры" йыр конкурстары ни ғәләмәт күп талант аҫҡан кеүек, йәшәйешебеҙҙең башҡа мөһим өлкәләрендә: иҡтисадта, эшҡыуарлыҡта ла ярышыу мөһим. Башҡортостандың бренды булып иҫәпләнгән ҡымыҙсылыҡты фәнни-тикшеренеү нигеҙендә үҫтереү, шуның менән йәнәшә милли аш-һыу, ҡорот, ҡыҙыл эремсек, талҡан һ.б. етештереү предприятиелары булдырыуҙы һәм уларҙы һатыуҙы ойоштороу, техник өлкәлә асыш яһаған башҡорт егеттәренең, ҡыҙҙарының уңыштарын пропагандалау - заман талабы.

Башҡорт телен һаҡлап ҡалыу, үҫтереү, русса һөйләшкән башҡорттар араһында туған телдә һөйләшеүҙең мөһимлеген аңлатырлыҡ заманса дәүләт программалары төҙөү мөһим дә, кәрәк тә. Шул саҡта туған телен һанлаған, ҡәҙерләгән милләттәштәребеҙ сафы артасаҡ. Был программаларҙа ҡатнашыу, унда еңеп сығыу еңел генә бирелмәҫкә тейеш, ул үҙенең башҡортлоғон иҫбатлаған һәр башҡортҡа етди хеҙмәт, рух көсө сарыф итеп уңыш ҡаҙанырлыҡ булһын.

Тарихты беләйек, ата-бабаларҙың ҡаһарманлығын иҫләйек, тип тә өндәшәм милләттәштәргә. Бөйөк көрәшселәргә, арҙаҡлы шәхестәребеҙгә тоғролоҡ һаҡлап, беҙгә, халҡым, барса мөмкинлегебеҙҙе, бөтөн һәләттәребеҙҙе егеп, зиһен байлығыбыҙға таянып, ысынбарлыҡ тормошобоҙҙа балҡырға кәрәк. "Һөтлө ил", "Сәскә байрам"дары уҙғарабыҙ. Ҡаршы түгелмен, был да кәрәк. Әммә милләтте һаҡлау - телде тере килеш һаҡлау икәнлеген аңлап, был хәл иткес һорауҙан ҡасмаҫҡа кәрәк ине Хөкүмәтебеҙ вәкилдәренә, хакимиәт башлыҡтарына, мәғариф етәкселәренә.

Һөт кеүек аҡ, сәскә кеүек саф күңелле халҡым! Ата-бабаларыбыҙҙан аманат итеп тапшырылған туған башҡорт телен һаҡлап ҡала алырлыҡ лайыҡлы алымдар ҡулланығыҙ, уйланылған ҡарарҙар ҡабул итеп, аҫаба халыҡтың теленә ихтирам артырлыҡ саралар ойоштороуҙы хуплап торoғоҙ. Туғандаш халыҡтар башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙән бер ни ҙә юғалтмай, киреһенсә, уларҙың донъяны танып-белеү мөмкинлектәре киңәйә, рухи донъяһы байый, күңелдәре үҫә, зиһене зирәкләнә, мәҙәнилеге арта. Ошо фекерҙе оло хөрмәт менән ҡабул ителерлек итеп аңлатайыҡ башҡаларға.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА,**
**Өфөләге 123-сө лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы,**
**БР мәғариф алдынғыһы.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Тыуған Башҡортостаныбыҙҙың документтарға нигеҙләнгән тарихын өйрәнеү мәсьәләләре менән 1996 йылдан алып шөғөлләнәм. Ошо темаға бағышланған 40-тан ашыу китабым баҫылды. Башҡорт яҙмаһы тарихын өйрәнеүҙе Елабуға ҡәберташындағы, Бөрө районы Яңы Ҡолсобай ауылы янындағы Тамғаташтағы, Нуриман районы элекке Бахмут ауылының ташмисәттәрендәге, Ейәнсура районы Үтәгол ауылында табылған еҙ беләҙектәге иероглиф (һүҙтамғалар) яҙмаларҙан башланым.**

# БОРОНҒО СЫҒАНАҠТАР - һүҙтамғаларҙа

Шуныһы һәр саҡ аптырата: ҡараңғыкүлдәй төпһөҙ бай тарихлы халҡымдың үткәне быға тиклем бары тик урыҫ телле сығанаҡтарға ғына һылтанып өйрәнелә килгән. Тапҡан мәғлүмәттәребеҙҙе интернетта, Башҡортостандың киң мәғлүмәт сараларында өҙлөкһөҙ баҫтырып барыуыбыҙға ҡарамаҫтан, китап сығарыусылар ауылдарыбыҙ тарихтарын 1795 йылға ғына бәйләп өйрәнеүҙе, ә тарих яҙыусылар телһеҙ археологик культуралар тураһында ғына һөйләүҙе дауам итә.

Әлбиттә, Әнүәр Әсфәндийәровтың ауылдар тарихын урыҫ ревизиялары материалдарына таянып яҙып, фәнни тикшереүгә башланғыс һалғанын инҡар итмәйем. Әнүәр ағай төплө ғалим булараҡ, граффитиологик тикшеренеүҙәрҙән дә ситтә булманы. Ул беҙҙең эҙләнеүҙәребеҙҙе күҙәтеп барҙы һәм һәр ваҡыт үҙенең абруйлы фекерен әйтә килде. Үҙенең бер хатында ул: "Бик тә урынлы эш, ундай эштәр башҡа урындарҙа башҡарылмай", - тип тә әйткәйне. Әммә беҙҙең интеллигенция ни эшләптер уның китаптарында телгә алынған даталарҙы ауылдарҙың нигеҙләнеү йылдары итеп ҡулланыуҙы хуп күрҙе.

Археология өлкәһенә килгәндә, бындағы эштәр бигерәк тә насар тора. Баймаҡ районы Бекеш ауылы, Бөрө янындағы, Стәрлетамаҡ убаларындағы уйғыр һәм ғәрәп яҙмалы Сулуҡ ҡаған, Күл тәкин, Булан ҡаған, Ҡара оғуз хан исемле хакимдарыбыҙ һуҡтыртҡан тәңкәләр табылыуға ҡарамаҫтан, тикшеренеүселәр тик телһеҙ сығанаҡтарҙы ғына өйрәнеүҙе дауам итте. Ҡараханлылар дәүләте тарихы ла, Авари Ганвас (Хазар ҡағанаты) дәүләте тарихы ла өйрәнелмәй ҡала килә. Дөрөҫ, Нияз ағай Мәжитов аҙаҡҡы эштәренең береһендә Филипповка убаларында, Өфө ҡалаһында табылған граффиттиҙарҙы баҫтырып сығарҙы. Тик боронғо яҙмаларҙы өйрәнеүсе белгес булмауы арҡаһында, ундағы текстар тикшерелмәйенсә, ҡомартҡыларҙы ҡалдырыусы сығанаҡтарҙың теле асыҡланмайынса ҡала килде. Юғары уҡыу йорттарыбыҙ иһә бары тик ғәрәп яҙмалары буйынса ғына белгестәр әҙерләп сығарыуҙан уҙа алманы. Исмаһам, берәр генә булһа ла рун, йә мон, йә брахми, йә хазар-караит, йә уйғыр яҙмалары белгесе әҙерләнмәне. Ә был яҙмалар бит халҡыбыҙҙа элек-электән ҡулланылышта булған.

Ошо етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн бынан өс йыл элек фекерҙәштәрем менән бергәләп интернетта "Архив древних актов башкир" тип аталған сайт, ә яңыраҡ иһә "Бәйләнештә" сайтында "Краеведение и граффитиология" тигән берләшмә астыҡ. Ләкин уларҙың ғына ярҙамы етмәй икәне аңлашыла торғандыр. Боронғо акттарыбыҙҙы эҙләү, һаҡлау, өйрәнеү эштәре менән шөғөлләнеүсе махсус архивтарыбыҙ (Башҡортостандың боронғо акттары архивы) булмауы ла бәкәлгә һуға. Дөрөҫ, ундай архивты төҙөү өсөн ер ҙә бүленгән, проект та төҙөлгән, әммә ҡасан был төҙөлөшкә аҡса бүленер, әлегә билдәһеҙ ҡала килә.

## Өфө ҡалаһы документтары

Минең уйлауымса, Мәхмүт Ҡашғариҙың урта быуат картаһында "Башгирд", Әл-Иҙриси картаһында "Башгурд әл һарифа", Португландағы ағалыҡустылы Пациганиҙар картаһында "Пацкарти" тип билдәләнгән Өфө ҡалаһы миләди йыл иҫәбе башланыуға тиклем - 5000-3000 йылдарҙан да алдараҡ төҙөлгән. Өфө ҡәберлектәрендә табылған яҙмалы бил ырғағы фаразымды раҫлай. Иероглиф, йәғни һүҙтамға өҫтән аҫҡа уҡыла. Бил ырғағындағы һүҙтамғалар Бирск Тамғаташы һәм Мохенджо Даро, Хараппа иероглифтары менән оҡшаш (1-се һүрәтте ҡарағыҙ). Ырғаҡта "Тффтхм мрднһ" (исемле ҡатынға), "Мардандан тффтхм" ("Марднһ" - ҡанғлы династияһынан ҡаған исеме) тип яҙылған. Был династия "Елабуға" ҡәберташтарына яҙылған яҙмалар аша билдәле.

Өфө ҡәберләктерендә табылған гетерографик яҙыулы ауыл хужалығы ҡоралы Өфө ҡалаһының боронғолоғон раҫлаусы тағы бер документ булып тора. Гетерограммалар уңдан һулға уҡыла (2-се һүрәтте ҡарағыҙ). Яҙыуҙар Арҡайымдағы яҙыуҙарҙан иртәрәк барлыҡҡа килгән, шуға күрә улар беҙҙең эраға тиклем 3000-2000 йылдар менән даталана. Был яҙмаларҙа уларҙы төҙөүселәр хаҡында мәғлүмәт бар. Текстарҙа улар "длд" (Далад), "сдс (Садас)", "ссдд" (Сасадад), "сдлтдд" (Садалтадад) тип яҙылған.

Киләһе документ - рун яҙмаһын ҡулланып, "Донгри миһасул лясин" тип яҙылған нота хаты (нотное письмо). Был яҙыуҙар беҙҙең эраға тиклем 600 һәм яңы эраның 639 йыл арауығына ҡарай. 3-сө һүрәттә боронғо, рун яҙмалы, күк йөҙө картаһы күрһәтелгән. Унда "Гк жгру" (Күк географияһы) тип яҙылған (Фәнни мөхиттә был граффити "лунница" исеме менән билдәле).

4-се һүрәттә Өфөлә табылған рун яҙмалы һөйәк балдаҡтар күрһәтелгән. Уларҙың береһендә "Лтбр" тип яҙылған, Илтабар төрөк принцтарының титулы.

5-се һүрәттә Өфөлә табылған Юстиниан төрөктәренең "киава - кейәү" византия тәңкәләре күрһәтелгән.

6-сы һүрәттә 350-639 йылдарҙа Ҡаңғлы, Төрөк ҡағанаттары дәүләттәре осоронда эшләнгән башҡорт нота китабы күрһәтелгән.

Өфө документтары бының менән генә сикләнмәй. Артабан ғәрәп яҙмалы документтар һәм сығанаҡтар ҙа бар. Улар 16-сы быуатта рус яҙыулы документтар һәм сығанаҡтар тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарыла.

**Иршат ЙЫҺАНБИРҘИН.**



1



2



3



5



4



6

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Ҡорот башҡорттарҙың киң таралған иң мөһим һөт ризыҡтарының береһе булып тора. Уны әҙерләгәндә ҡаҙанда яңы һауылған һөттө ҡайнаталар, һуңынан ҙур ағас табаҡтарға ҡойоп һыуыталар. Һыуығас, өҫтөндәге бешкән ҡаймағын алып, һөттө ағас тәпәндәргә бушатып, ҡатыҡ итеп әсетәләр. Әгәр тәпәндә ҡатыҡ башы ҡалған булһа, һөт үҙенән-үҙе әсей. Әсегән һөттөң эремсекле массаһы төбөнә ултырғас, өҫкә сыҡҡан һыуын һоҫоп алып торалар. Тәпәнде шулай эремсекле масса менән тултырғас, уны ҡаҙанға бушатып, һыуынан айыралар. Һуңынан тоҡтарға һалып, һығып алынған эремсекте - йәш ҡоротто шунда уҡ ҡуллана башлайҙар, йәки еңелсә генә тоҙлап, 7-10 сантиметр диаметрлы шарҙар әүәләп, ҡояшта йәки махсус эшләнгән ылашта киптерәләр. Ылаш (һүрәт) түбәндәгесә эшләнә. Ергә ҡағылған дүрт ҡаҙыҡҡа ике арҡыры ҡаҙыҡ, уларға арҡырыға нәҙек сыбыҡтар һалына. Ошо сыбыҡтар өҫтөнә ҡорот шарҙары урынлаштырыла. Ҡайһы берҙә ылашты усаҡ өҫтөнә эшләйҙәр. Быны бигерәк тә тау башҡорттарында күҙәтергә мөмкин.



Ҡорот шулай тиҙерәк кибә. Был осраҡтарҙа ул төтөн еҫен һеңдерә һәм шуға ла ҡайһы бер авторҙарҙың, башҡорттар ҡоротто ыҫлай, тип раҫлауына юл ҡуя.

Ҡоротто һаҡлау өсөн тал сыбыҡтарынан груша формаһында махсус сыттар үрелгән йәки тубал эшләнгән.

Башҡорттар майҙы аҡ май һәм һары май итеп эшләй. Һуңғыһы, ғәҙәттә, һатыу өсөн әҙерләнә. Үҙҙәре өсөн башҡорттар аҡ май төшөрә; уны бейек, диаметры бәләкәй булған силәктә бешкәк менән бешәләр.

Ризыҡҡа әсегән һөткә ҡаймаҡ ҡушып бешелгән күбек май ҙа ҡулланыла.

Һыйыр һөтөнән әҙерләнгән айран киң таралған. Уны барлыҡ башҡорттар ҙа тиерлек әҙерләй. Бары тик Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында рус кеүәҫен әҙерләй башлағас, айран эшләмәгәндәр. Айран ҡымыҙ кеүек үк әҙерләнә. Әммә ҡымыҙҙан айырмалы, уны ҡайһы ваҡыт һыу менән шыйыҡлайҙар. Ҡайһы бер урындарҙа май төшөргәндә сыҡҡан шыйыҡлыҡты ла айран тип атайҙар һәм шуны эсәләр.

Бейә һөтөнән бары тик ҡымыҙ әҙерләнә. Уны әҙерләү ысулдары барыһына ла билдәле. Был мәсьәлә буйынса махсус һәм бик күп әҙәбиәт бар. Башҡорттарҙың ҡымыҙ бешеүе малсылыҡ менән шөғөлләнгән күсмә халыҡтарҙыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Ҙур күн һауытҡа, һуңынан уны ағас һаба алмаштыра, һауып алынған бейә һөтө һалына, ҡайһы бер ваҡытта уға һыу ҡушалар. Алдан ҡулланылған һауыттарҙың ситендә йәки төбөндә һәр саҡ ҡур йәки әсетке ҡалдырыла. Яңы һөт һалғас, улар үрсей һәм һөттө әсетә башлай. Әгәр һауыт яңы булһа, яңы һөткә икенсе һауыттан йәки уҙған йылдан ҡалған ҡымыҙ һалына. Ҡымыҙ өҫтөнә яңы һөт һалынған һайын уны махсус бешкәк ярҙамында болғайҙар. Өс-дүрт көндән ҡымыҙ әҙер була.

Бешкәк - оҙонлоғо 1 метр, бер башында диаметры 15-25 сантиметрлы тишекле түңәрәк булған таяҡ. Ғәҙәттә уны тотош ағастан эшләгәндәр: һабы - ағас олононан, ә ҡулсаһы тамырынан яһалған. Ҡайһы берҙә ҡулса урынына әүернә (крестовина) ҡуйылған (һүрәт).



***✓ Балаларҙы үҙгәрештәр заманында йәшәргә өйрәтергә бурыслыбыҙ. Донъя практикаһы шуны күрһәтә: һәр бер яңылыҡ кешене стресҡа алып килә. Стрестан ҡотолоп булмай, шуға күрә стресс менән йәшәргә өйрәнергә тейешбеҙ.***

# АШАҒАН БЕЛМӘЙ,

## йәки Мәғарифҡа заманса

**Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институты ойошторолоуына быйыл 80 йыл тула. 80 йыл - ул аҡһаҡал йәше һәм ошо ваҡыт арауығында институт өлгәшкән уңыштарҙың иң ҙуры, моғайын да, ошо ваҡыт һуҙымында республикабыҙ өлгәшкән ҡаҙаныштар менән үлсәнә торғандыр. Нимә генә тимә, һәр төрлө үҫеш мәғарифтан тыш була алмай. Шулай булғас, беҙ был институт үҙенең данлыҡлы юбилейын лайыҡлы ҡаршылай, тип ауыҙ тултырып әйтә алабыҙ. Ошо уңай менән институттың ректоры Рәмил Ғиниәт улы МӘЖИТОВ, милли мәғарифты методик яҡтан тәьмин итеү үҙәге етәксеһе Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы НАФИҠОВА һәм психология кафедраһы мөдире Лилиә Рәшит ҡыҙы ХАЛИКОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Һеҙ эшләгән институт төрлө йылдарҙа төрлөсә аталып йөрөтөлһә лә, беҙҙеңсә, уның асылы бер үк төрлө ҡала килә лер, ул да булһа: мәғарифты үҫтереү, уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу, уҡыу-уҡытыу системаһының фәнни-ғәмәли процесс менән тығыҙ бәйләнешен тәьмин итеү һ.б. Башҡа фәнни учреждениелар, юғары уҡыу йорттары менән сағыштырып ҡарағанда, һеҙ эшләгән институт үҙенсәлеге нимәлә тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Р. МӘЖИТОВ:** 1933 йылда беҙҙең институт мәғариф өлкәһендә, халыҡ хужалығында белгестәр әҙерләү маҡсатында барлыҡҡа килгән. Совет иленең аяҡҡа баҫып килгән тәүге осоронда ошондай институт асылыу мөмкинлеге табылыуы күп нәмә хаҡында һөйләй. Тимәк, ул саҡтағы республика етәкселеге күпкә алға ҡарап фекер йөрөтөү ҡеүәһенә эйә булған. Беҙҙең институтта төрлө йылдарҙа Рәшит Әлмөхәмәтов, Роберт Арыҫланов, Рәфҡәт Абдуллин, Фәүҡәт Ҡыҙрасов, Светлана Ғәләүетдинова, Фәнил Күзбәков, Рөстәм Ишмөхәмәтов етәксе булып эшләгән.

Минең үҙемә 1984 йылда институттың директорҙар резервын әҙерләү курсында уҡырға тура килгәйне. Ҡыҙғаныста күрә, хәҙер ундай курстар юҡ. Уларҙы тиҙ арала тергеҙеү тураһында уйлашабыҙ, сөнки директорҙар проблемаһы бар һәм ул йылдан-йыл киҫкенләшә бара. Бигерәк тә ауыл мәктәптәрендә директорҙарҙы һайлап ҡуйыу өсөн кандидаттар юҡ кимәлендә. Кадрҙар юҡ, тип әйтеүе анһат, ә бит уларҙы әҙерләргә кәрәк. Хәҙерге ваҡытта республикабыҙҙың 92 процент уҡытыусыһы беҙҙең институтта белемен камиллаштыра. Бының өсөн ҡайһы бер уҡыу йорттары беҙҙе тәнҡитләп тә маташа. Нисек кенә булмаһын, уҡытыусылар араһында беҙҙең курстарға ихтыяж ҙур. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, ойоштороусыбыҙ булараҡ, беҙгә Хөкүмәтебеҙ заданиеһын еткерә. Беҙ йылына 13820 уҡытыусыны бюджет нигеҙендә уҡытабыҙ. Был хәл учреждениебыҙҙың уҡытыусылар өсөн ни тиклем кәрәклеге хаҡында һөйләй.

Быларҙан тыш, мәҫәлән, Берҙәм дәүләт имтиханы материалдары беҙҙең институтта эшкәртелә. Йылына 15 мең уҡытыусы беҙҙә аттестация үтә. Аттестацияға әҙерлек эше лә беҙҙә алып барыла. Мәғарифтың Федераль милли проекты буйынса конкурсты ла беҙ ойошторабыҙ. Бында 900-ләп уҡытыусы ҡатнаша. Тағы ла беҙҙең институтта төрлө үҙәктәр, шул иҫәптән уҡытыуҙың сифатын күҙәтеү үҙәге бар. Беҙ шулай уҡ милли дәреслектәр яҙабыҙ. Быларҙың һәр береһе бик яуаплы эш һанала.

Йыл һайын төрлө предмет уҡытыусыларының "Йыл уҡытыусыһы" конкурстарын үткәреп киләбеҙ. Шул конкурстарҙа еңгән уҡытыусыларҙың тәжрибәһен күрһәтеү һәм таратыу буйынса ла беҙҙә аҙна һайын йә семинар, йә конференция үтә. Бер нисә йыл инде беҙҙең институт тарафынан ойошторолған "Оҫта уҡытыусы" һәм " Педагог тикшеренеүсе" тигән ҡыҙыҡ ҡына йөкмәткеле конкурс үтеп тора. Әле яңыраҡ "Йыл тәрбиәсеһе" тигән яңы конкурс барлыҡҡа килде һәм тәүге тапҡыр үткәрелде. Унда ҡатнашыуға барлығы 42 ҡала һәм район үҙенең тәрбиәселәрен ебәрҙе. Беҙ уҡытыусыларҙы уҡытып ҡына ҡалмайбыҙ, шулай уҡ фәнни эҙләнеү эштәренә лә йәлеп итәбеҙ.

**З. НАФИҠОВА:** Төбәк мәғарифын үҫтереүгә лә беҙҙең институт тос өлөш индерә. Ҡабул ителгән яңы закондарҙың, положениеларҙың, хоҡуҡи акттарҙың йөкмәткеһен төшөндөрөү, уларҙы ысынбарлыҡта нисек итеп ҡулланырға кәрәклеге өҫтөндә беҙҙең белгестәр эшләй. Беҙҙә һәләтле балалар менән эш итеү, шулай уҡ милли мәғарифты методик яҡтан тәьмин итеү үҙәктәре бар. Яңы стандарттар, яңы концепциялар барлыҡҡа килде һәм шуларҙан беҙҙең милли мәктәптәрҙә бер аҙ төшөнкөлөккә бирелеү күренештәре булып алды. Был проблема күп йәһәттән хоҡуҡи документтарҙы аңламауҙан киләлер тип уйлайым. Шул уҡ Рәсәй һәм Башҡортостан закондарын алып ҡараһаҡ, унда бөтә нәмә лә ап-асыҡ һәм аңлайышлы итеп яҙылған. Уларҙы дөрөҫ итеп аңлап, еренә еткереп тормошҡа ашырыусы кешеләр генә юҡ. Әгәр ҙә яңы документтар буйынса мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороу мәктәп директорының иңенә һалынған икән, бөгөн асылда завхоз булып тороусы директорҙарыбыҙ ни эшләргә белмәйенсә, оло аптырашта ҡала. Директор буяу артынан да, таҡта артынан да йүгерә, ә уҡытыу-тәрбиә эшенең эстәлегенә инергә уның ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Шуның өсөн, яңы закондарҙы, стандарттарҙы уҡымағас, белмәгәс, асылына төшөнмәгәс, улар: "Ярай, ана 1-се вариант уҡыу планы бар икән, шуның буйынса уҡытабыҙ", - тип, килешә лә ҡуя. Ә ул 1-се вариант уҡыу планында туған телдәрҙе уҡытыу бөтөнләй юҡ. Тағы ла бер-ике ата-әсә ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғатып ебәрһә, ҙур бер ғауға килеп сыға. Быны булдырмаҫ өсөн беҙҙең институтта мәғариф менән идаралыҡ итеү кафедраһы бар. Һуңғы йылдарҙа был кафедраның эшен көсәйтеү буйынса арыу ғына эш алып барыла.

Милли мәғарифты методик яҡтан тәьмин итеү үҙәгенең зарурлығын ныҡ тоябыҙ. Сөнки милли мәғарифты үҙебеҙ яҡламаһаҡ, ситтән килеп бер кем дә быны беҙҙең өсөн эшләмәйәсәк. Башҡорт мәктәптәрендә стандарт талаптарына ярашлы уҡыу-уҡытыу процесын камиллаштырыу уйы менән башланған эш был. Быға тиклем Милли мәғариф проблемалары институты була торғайны. Уны яптылар, әммә проблемалар асыҡ көйө ҡалды. Беҙҙең дәреслектәр авторҙары бөгөн 70-80 йәшлек әбей-бабайҙар, ә йәштәрҙе йәлеп итеүсе кеше юҡ. Үҙәктең төп маҡсатының береһе - йәш кадрҙар әҙерләү. Ике йыл эсендә әҙ комплектлы башҡорт мәктәптәре шарттарында рус телен уҡытыу өсөн методик ҡулланма әҙерләнек һәм нәшриәткә тапшырҙыҡ. Бындай әсбаптар кәрәклеге шунда: әлеге лә баяғы Берҙәм дәүләт имтиханы тап ошондай мәктәптәрҙең башына һуға. "Һеҙҙең балалар берҙәм дәүләт имтиханын бирә алмай. Шулай булғас, һеҙгә башҡорт телен уҡытыу нимәгә кәрәк? Башҡорт телен өйҙә уҡыһындар, бында рус теленә дәрестәр һаны етмәй..." тигәнерәк дәғүәләрҙе бик йыш ишетергә тура килә. Кеше ни тиклем күберәк тел белһә, уның үҫеш кимәле шул хәтлем юғарыраҡ була. Ғөмүмән, Рәсәй кимәлендә алғанда ла беҙҙең уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтиханын биреүселәр араһында алдынғылар рәтендә. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыған уҡыусыларҙың, киреһенсә, рус телендә лә, инглиз телендә лә телмәре, фекерләүе яҡшыра барыуын дәлилләй уҡытыусылар. Бының серҙәре ябай ғына: беренсенән, һәр нәмәне сағыштырып өйрәнеү хәҙерге заман талабына тура килә, икенсенән, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәренең, әйтәйек, инглиз телендә лә булыуы был телде өйрәнеүселәргә ярҙам ғына итә.

Быларҙан тыш, рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү өсөн 1-се класҡа комплект эшләнек. Дәреслеген "Күстәнәс" тип атаныҡ. Шунда уҡ уҡытыусыға ярҙамға методик ҡулланма, программа бар. Ошондай уҡ эште артабан 2-се, 3-сө, 4-се кластарға дауам итербеҙ, тигән уйыбыҙ бар.

Беҙҙең институт күп яҡлы, төрлө йүнәлештә эш итә. Белгестәребеҙ уҡытыусылар менән ғәмәли йәһәттән тығыҙ бәйләнештә тора. Юғары уҡыу йортонда бер лекция әҙерләп, уны ғүмер буйына студенттарға уҡырға була. Ә беҙҙә улай итеп булмай, сөнки тормош туҡтауһыҙ үҙгәрештә, үҫештә. Әгәр ҙә беҙ әҙ генә һуңлаһаҡ, артта ҡалһаҡ, беҙҙе уҡытыусылар ҡабул итмәйәсәк. Уҡытыусының уҡыу-уҡытыу процесындағы роле үҙгәрә бара. Уҡытыусы хәҙер белем биреүсе түгел, белем алырға йүнәлеш биреүсе генә. Элекке уҡытыусы тарихта тороп ҡала бара. Хәҙер дәрес процесына Интернет инә, киң мәғлүмәт сараларын ҡулланыу механизмдары үҫә.

**Р. МӘЗИТОВ:** Рәсәйҙәге беҙҙеке һымаҡ институттар демократлаштырыу процестары шарттарында ябылып бөттө. Күршеләребеҙ Ырымбурҙа ла ябылды, Татарстан бындай институтын кире тергеҙергә тырыша, быйыл июнь айында беҙгә килеп тәжрибә уртаҡлаштылар. Беҙ уҡытыусыларға модуль программаларҙы һайлап алыу мөмкинлеге бирәбеҙ. Беҙҙең һәр районда һәм ҡалала бер нисәшәр, барлығы 320 стажер мәктәп бар.

**▸ Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап мәғариф өлкәһендә иҫәпһеҙ-һанһыҙ инновациялар барлыҡҡа килеүе күҙәтелә. Яңы закондар, положениелар, ҡарарҙар, стандарттар кеүек төшөнсәләр бер туҡтауһыҙ яуып ҡына тора. Ә бит быларҙың барыһы ла һуңғы сиратта "тәжрибә ҡуяны" ролен үтәгән балаларҙың башына төшә. Бер законды өйрәнеп өлгөрмәйһең, икенсеһе килә, был хатта махсус рәүештә эшләнгән һымаҡ та булып китә. Ҡытайҙарҙа, япондарҙа кешене ҡарғаған саҡта хатта "Үҙгәрештәр заманында йәшә!" тип тә әйтәләр икән...**

**Л. ХАЛИКОВА:** Ысынлап та, беҙ туҡтауһыҙ үҙгәрештәр заманында йәшәйбеҙ һәм беҙ, иң беренсе сиратта, балаларҙы үҙгәрештәр заманында йәшәргә өйрәтергә бурыслыбыҙ. Донъя практикаһы шуны күрһәтә: һәр бер яңылыҡ кешене стресҡа алып килә. Стрестан ҡотолоп булмай, шуға күрә үҙебеҙҙе һаҡлап, стреста йәшәргә өйрәнергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә кеше үҙен социаль яҡтан ойоштормаһа, стресс кисереүе мөмкин. Был йәһәттән беҙҙең институт уникаль учреждение. Ул тиҙ генә яңылыҡтарҙы аңлап, эшкәртеп, мәктәпкә, уҡытыусыға мөмкин тиклем аңлайышлыраҡ, ябайыраҡ, стресҡа йоғонтоһо аҙыраҡ булған рәүештә еткерергә тырыша.

Әле яңы стандарттар килеп етте. Был йәһәттән нимәһе мөһим? Беҙ бөгөн уҡыусы балаларҙы күп мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтергә бурыслы. Икенсенән, балаларҙың аралаша белеү һәләтен - коммуникатив компетенцияһын үҫтереү ҙә уларҙы стрестан һаҡлай. Өсөнсөнән, креативлыҡ, йәғни балаларҙың ижадҡа һәләтен асыу ҙа маҡсатҡа ярашлы. Әгәр ҙә ошо өс компетенция берҙәй булып формалашһа, уҡыу-уҡытыу мөхите лә еңелләшә. Яңы стандарттар буйынса уҡытыусы хәҙер тәрбиәсе лә, психолог та, социаль педагог та булырға тейеш. Уҡытыусының профессиональ стандарты ошоно талап итә. Беҙ барлыҡ яңылыҡтарҙы ла гуманистик принциптарға таянып, мәктәптәргә ҡулайлаштырылған формала еткерергә тырышабыҙ.

Иң мөһим компетенцияларҙың береһе - регулятив компетенция. Ул уҡыусыға имтихандар осоронда үҙ-үҙен ойоштороуға булышлыҡ итеүгә йүнәлдерелгән. Шул уҡ Берҙәм дәүләт имтиханына психологик яҡтан да ныҡлы әҙерлек кәрәк. Сөнки уҡыусы предметты белгән осраҡта ла, үҙ-үҙен ҡулға ала алмайынса, насар һөҙөмтәләргә өлгәшеүе бар. Һәр бала ла бындай осраҡҡа әҙер түгел һәм ундай сифаттарҙы уҡыусыла формалаштырыу зарур. Бында, әлбиттә, психологи-

***Директор буяу артынан да, таҡта артынан да йүгерә, ә уҡытыу-тәрбиә эшенең эстәлегенә инергә уның ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Шуның өсөн, яңы закондарҙы, стандарттарҙы уҡымағас, белмәгәс, асылына төшөнмәгәс, улар: "Ярай, ана 1-се вариант уҡыу планы бар икән, шуның буйынса уҡытабыҙ", - тип, килешә лә ҡуя. Ә ул 1-се вариант уҡыу планында туған телдәрҙе уҡытыу бөтөнләй юҡ. Тағы ла бер-ике ата-әсә ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғатып ебәрһә, ҙур бер ғауға килеп сыға. Быны булдырмаҫ өсөн беҙҙең институтта мәғариф менән идаралыҡ итеү кафедраһы бар. Һуңғы йылдарҙа был кафедраның эшен көсәйтеү буйынса арыу ғына эш алып барыла.***

***✓ Берҙәм дәүләт имтиханын уйлап табыусы кеше, йәнәһе, үҙ ғүмерендә яһаған иң ҙур хатаһы ошо булыуы хаҡында әйткән. Әммә БДИ-ның ыңғай яҡтары күплегенә лә ышандыҡ.***



# ТУРАҒАН БЕЛӘ...

## ҡараш зарурлығы

яның роле ҙур. Был хаҡта Мәғариф тураһындағы яңы закондың 42-се статьяһында яҙылған. Ғәҙәттә, психологик үҙәктәрҙең эшмәкәрлеге күберәк үҙ-үҙенә ҡул һалыу кеүек негатив күренештәр менән генә бәйле. Минеңсә, был эш беренсе нәүбәттә уҡытыу процесын еңелләштереү маҡсатында ойошторолорға тейештер.

**З. НАФИҠОВА:** Иң беренсе нәүбәттә бөгөн ата-әсәләр менән эш итергә кәрәк. Ни өсөн тигәндә, хәҙер мәктәпкә 80-се йылдарҙа тыуғандарҙың балалары килде. Был ата-әсәләр үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда тыуҙы һәм уларҙың тәрбиәһе лә, проблемалары ла икенсерәк.

**▸ Яңы закондар, стандарттар, ысынлап та, кәрәк инеме? Уларҙың зарурлығы нимәгә бәйле тип уйлайһығыҙ?**

**Р. МӘЗИТОВ:** Халыҡ-ара, федераль тикшеренеүҙәргә таянып, беҙ быға тиклем "Совет уҡытыу системаһы донъяла иң көслөһө булды", тип әйтә килдек. Баҡтиһәң, беҙҙең уҡытыу системаһы уҡыусының алған белемен тормошта нисек ҡулланыуын ойоштора белмәй. Был күрһәткес буйынса беҙ донъяла 40-45-се урынды ғына биләйбеҙ. Уҡытыу стандарттарын алыштырыуҙың төп нигеҙе ошо сәбәпкә бәйле. Мәҫәлән, башланғыс класс уҡыусылары ҡабатлау таблицаһын яҡшы белә, әммә 3-4 ғәмәлдән торған мәсьәлә бирһәң, эшләй алмай. Яңы Федераль стандарттар ошо йәһәттән талаптар ҡуя. Ысынлап та, хәҙерге ваҡытта мәғлүмәт "бумы" бара. Шул шарттарҙа уҡытыусы тәү сиратта үҙе мәғлүмәт технологиялары менән эш итә белергә, шул уҡ ваҡытта уҡыусыны быға өйрәтергә тейеш. Ә беҙҙә киреһенсә килеп сыға: уҡыусы уҡытыусыһына ҡарағанда күберәк белә.

Бөгөн дистанциялы уҡытыу хаҡында күп һөйләйбеҙ. Әммә, минеңсә, дистанциялы уҡытыу технологияһы уҡытыусыға ярҙам ролен генә үтәргә тейеш. Нимә генә тимәйек, уҡытыусыны бер кем дә, бер нәмә лә алмаштыра алмай. Дистанциялы уҡытыу технологияһы дәрестең һөҙөмтәлелеген күтәреү маҡсатында ғына ҡулланылырға тейеш. Конкурстар барышында бирелгән асыҡ дәрестәрҙә күпселек уҡытыусылар ул технологияларҙы матур һәм урынлы итеп файҙалана.

***Бөгөн дистанциялы уҡытыу хаҡында күп һөйләйбеҙ. Әммә, минеңсә, дистанциялы уҡытыу технологияһы уҡытыусыға ярҙам ролен генә үтәргә тейеш. Нимә генә тимәйек, уҡытыусыны бер кем дә, бер нәмә лә алмаштыра алмай. Дистанциялы уҡытыу технологияһы дәрестең һөҙөмтәлелеген күтәреү маҡсатында ғына ҡулланылырға тейеш. Конкурстар барышында бирелгән асыҡ дәрестәрҙә күпселек уҡытыусылар ул технологияларҙы матур һәм урынлы итеп файҙалана.***

**▸ Йәшерен-батырыны юҡ: беҙ һаман да балаларҙы совет осорондағы кеүек көсләп уҡытабыҙ. Әгәр ҙә бөгөндән дистанциялы уҡытыуға күсһәк, күптәр уҡымаясаҡ.**

**Л. ХАЛИКОВА:** Нигеҙҙә, стандарттарҙың төп идеяһы балаларҙы үҙ өҫтөндә эшләргә өйрәтеүҙә. Көсләп уҡытылған бала, көсләп асылған күҙҙең нуры булмай, тигән кеүек була инде. Әммә беҙ яйлап-яйлап балаларҙы үҙе теләп уҡырға өйрәтергә бурыслы. Әлбиттә, глобалләшеү процестары тиҙ бара, беҙ унар йыллап көтөп ултыра алмайбыҙ. Яңы законда белем алыуҙың мөмкинлектәре киңәйеүе күҙаллана. Бөгөн мәктәпкә белем кимәле буйынса ла, һаулыҡ яғынан да төрлө балалар килә. Уларҙы башҡа уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа бер тигеҙ итеп ҡабул итергә тейеш. Беҙҙең эшмәкәрлектең бер маҡсаты ошо күренешкә лә йүнәлтелгән. Мин дә дистанциялы уҡытыуҙы ярҙамсыл алым рәүешендә генә күрәм.

**Р. МӘЗИТОВ:** Өҫтәмә рәүештә кемдең үҙ белемен камиллаштырыу теләге бар, дистанциялы уҡытыу иң беренсе нәүбәттә шулар өсөндәр. Тик был уҡыу формаһын оптималләштереү менән бәйләргә ярамай. Юғиһә, быны күрше ауыл мәктәбенә уҡырға барыр урынына баланы компьютер алдына ғына ултыртып, алыҫтан тороп дәрес биреү, тип тә аңлаусылар булыуы мөмкин. Бала иң беренсе сиратта ҡәҙимге аралашыу мөхитенә инергә тейеш. Ә бына һаулығы сикләнгән балалар өсөн, мәҫәлән, был уҡыу төрө ҡулайлылыр, тием.

**З. НАФИҠОВА:** Әгәр ҙә төпкөл ауылдарҙағы балаларҙы дистанциялы уҡытыуға күсерһәк, бер нисә йылдан беҙ күпкә артта ҡалған шәхестәрҙе генә күрәсәкбеҙ. Донъяла үҙгәрештәр күҙ асып йомған арауыҡта бара.

**Р. МӘЗИТОВ:** Май айында Германияла булғанда шәхси колледж директоры менән осраштыҡ. Ул дистанциялы уҡытыуҙы "Интернет буйынса яратыу"ға тиңләй. Әгәр ҙә беҙҙәге бер мәктәпкә йә колледжға барһаң, директор йә уҡытыусы компьютер кластарын, технологик мөмкинлектәрҙе күрһәтеп, маҡтанып йөрөй. Ә Германияла улар аҡбур, сепрәк йә линейка кеүек ҡәҙимге мәктәп атрибуты иҫәпләнә. Беҙҙә лә шулай булырға тейеш. Сөнки уҡытыусы техника менән артыҡ мауығып китһә, ул балаларҙы онотасаҡ һәм уҡытыу процесы икенсе планға күсәсәк.

Берҙәм дәүләт имтиханын уйлап табыусы кеше, йәнәһе, үҙ ғүмерендә яһаған иң ҙур хатаһы ошо булыуы хаҡында әйткән. Әммә БДИ-ның ыңғай яҡтары күплегенә лә ышандыҡ. Әйтәйек, төпкөл ауылдарҙа мәктәп тамамлаған балалар уның һөҙөмтәләре буйынса илебеҙҙең Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарына инә ала. Элек был бөтөнләй мөмкин түгел ине. Шул уҡ ваҡытта бөтөн балалар ҙа тигеҙ түгел һәм БДИ бирә алмаҫлыҡ балалар ҙа юҡ түгел. Был мәсьәләгә һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ нисек?

**Р. МӘЗИТОВ:** Берҙәм дәүләт имтиханы ҡапыл килеп сыҡты тип әйтә алмайым. Уға әҙерлек күпкә алдараҡ башланды. Тәүҙә БДИ-ны репетиция формаһында биреп тә ҡаранылар. БДИ баланы ике тапҡыр - мәктәп тамамлағанда һәм уҡыу йортона ингәндә стресс кисереүҙән арындырыр өсөн дә барлыҡҡа килде. Әммә Рәсәй үлсәмдәре буйынса һәр изге башланғыс аҙаҡтан йәмһеҙ күренештәргә килтерә. Хәҙер коррупция механизмы уҡыу йорттарынан мәктәптәргә күсте. БДИ-ны хәҙер уҡыусылар түгел, "Ата-әсәләр конкурсы" тип тә атайҙар. Минеңсә, БДИ биргәндә кеше факторын кисектереү өсөн һәр уҡыусы имтиханды компьютер артына ултырып бирергә тейештер. Әйтәйек, водитель танытмаһы алғанда теорияны тапшырған һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта бөтә балалар ҙа БДИ бирергә тейешме-юҡмы, был хаҡта ла уйлап ҡарарға кәрәктер.

**Л. ХАЛИКОВА:** БДИ технологияға ҡоролған. Шулай булғас, имтиханда ҡуйылған мәсьәләләрҙең сиселешен дә уҡыусылар шул уҡ технология ярҙамында тиҙ табасаҡ, күсерәсәк. Бәлки, бында, киреһенсә, йәнле аралашыуҙың, кеше факторының зарурлығы сағылалыр. БДИ тик ун беренсе класс өсөн генә бирелмәй. Шуға күрә ата-әсәләр имтиханға балаһын күпкә алдараҡ әҙерләй башларға бурыслы.

**З. НАФИҠОВА:** Ата-әсәләр балаһының кем булырын, киләсәк яҙмышын тап ошо БДИ ваҡытында хәл итергә ынтыла. Улар ҡасандыр үҙҙәренең тормошҡа ашмаған хыялдарын балаһы аша тормошҡа ашырырға тырыша. Һөҙөмтәлә уларҙың балаһы тап ошоноң өсөн үҙҙәрен ҡорбан итә һәм уның тормошоноң мәғәнәһе юғала. Яҙылмаған ҡанундар буйынса кеше үҙенең тормош иптәшен, һөнәрен үҙе һайларға тейеш.

**Л. ХАЛИКОВА:** Бөтә балалар ҙа юғары белем алырға тейеш, тигән принцип бөтөнләй дөрөҫ түгел. Юғары уҡыу йорттарына инергә ваҡыт етһә, ата-әсәләр араһында ысын мәғәнәһендәге "социалистик ярыш" башлана. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: әгәр ҙә урам һепереүселәр бер аҙна ғына урамдарҙы таҙартмаһа, нимә килеп сығыр ине? Сүплек ояһында тороп ҡалыр инек. Беҙҙең ата-әсәләрҙең фекерләүе ошо хәҡиҡәтте аңларлыҡ дәрәжәгә үҫешеп етмәгән әле.

**Р. МӘЗИТОВ:** Минеңсә, БДИ-ны биреү буйынса һәр мәктәптең, һәр райондың, һәр ҡаланың билдәле бер системаһы булырға тейештер. Тик системалы эшләгәндә генә һөҙөмтә буласаҡ.

**З. НАФИҠОВА:** Норматив документтарҙа уҡыу-уҡытыу процесының өс объекттан: баланан, уҡытыусынан һәм ата-әсәнән тороуы әйтеп үтелә. Ошо өс тағандың береһе эшләмәһә, бер нәмә лә килеп сыҡмай. БДИ бөтөн балалар ҙа һайлай торған нәмә түгел. Сөнки ул лотерея уйыны кеүек. Кешенең бөтөн нәмәне лә белеп бөтөрөүе мөмкин булмаған кеүек, имтихандың был төрөн белемгә объектив баһа тип тә атап булмай. Тест ярҙамында ғына кешенең фекерләү ҡеүәһен, аң-белем даирәһен тикшереп, һығымта яһап булмай. Хәҙерге ваҡытта уҡытыусылар һәм уҡыусылар мәктәптә ысынбарлыҡтағы ҡәҙимге тормош менән йәшәмәй, ә бары БДИ-ға ғына әҙерләнә. Кеше оҙайлы ваҡыт бер нәмәне көтөп йөрөһә, уның борсолоу-хафаһы арта ғына бара. Был осраҡта стресс ҡотолғоһоҙ.

**Р. МӘЗИТОВ:** Цивилизациялы илдәрҙә уҡыусы бала мәктәптән өлгөргәнлек аттестаты алып сыға һәм ошо документында ҡуйылған билдәләр менән теләгән юғары уҡыу йортона барып, имтиханһыҙ ғына конкурста ҡатнаша ала. Бәлки, беҙҙә лә киләсәктә шулай булыр, ә бөгөн һәр бер ата-әсә, балаһы һәләтлеме-түгелме, түләп уҡыта, һуңынан балаһы алған белеме буйынса эшләмәй. Был беҙҙең йәмғиәттең кире күренештәренең береһе.

**▸ Шәхес формалашыуы өсөн тулы ҡанлы тормош менән йәшәгән коллективтың булыуы шарт. Юҡҡа ғына шәхес төшөнсәһе аңлатмаһының береһендә "Шәхес - ул шәхес һәм шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙең ансамбле" тип әйтелмәй. Ошо күҙлектән ҡарағанда, тулы булмаған комплектлы мәктәптәрҙәге балаларҙы бер мәктәпкә йыйыу үҙ-үҙен аҡлай ҙа һымаҡ. Әммә мәсьәләнең икенсе яғы: төпкөл ауылдарҙан автобус менән көн һайын 15-20 саҡрым арауыҡҡа балаларҙы йөрөтөү ҙә дөрөҫ түгел...**

**Л. ХАЛИКОВА:** Тикшереүҙәр шуны күрһәтә: класта ике уҡыусы ғына бар икән, ти, уларҙың белеме 15-20 уҡыусы булған кластағы балаларҙыҡынан түбәнерәк. Әммә был хәл тота килеп барлыҡ тулы булмаған комплектлы мәктәптәрҙе ябырға кәрәк тигәнде аңлатмай.

**З. НАФИҠОВА:** Минеңсә, өлкән класс балаларын күрше ауылдарға йөрөтөп уҡытырға була, ә бына башланғыс класс балалары барыбер ҙә үҙ ауылындағы башланғыс мәктәптә уҡырға тейештер. Әсәһенең итәгенән яңы төшкән баланы ҡайҙалыр ситкә алып барып уҡытыу баланың үҙе һәм ата-әсәһе өсөн дә бик ауыр күңел һынауына, стресҡа алып килеүе бар. Был юл менән беҙ баланы кескәй сағынан уҡ мәктәптән, белем алыуҙан биҙҙерәбеҙ генә. Кешеләр менән аралашыу түгел, үҙ-үҙен дә хеҙмәтләндерә белмәгән баланы сит ауылға йөрөтөү бер ниндәй нормаға һыймай.

**Р. МӘЗИТОВ:** Оптималләштереү яңы төшөнсә түгел. Ул совет осоронда ла булды. Тик ул сағында был күренеш мәғариф учреждениелары селтәрендә уҡыусыларҙы рациональ урынлаштырыу тип атала ине. Әгәр ҙә ике ауылдың араһы ике саҡрымдан артмай икән, был сағында был ауылдар балаларын бер мәктәптә уҡытыу әллә ниндәй проблемалар тыуҙырмай. Тик бына ауылдар араһы 10-20 саҡрым икән, бында проблемалар башлана. Беҙ һәр яңылыҡты кампанияға әйләндереп ебәрәбеҙ, уйлап эш итеү етмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр бер йорт төрлө өлөштәрҙән, берәмектәрҙән торған кеүек, мәғариф системаһының да үҙ өлөштәре, берәмектәре бар. Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институты ошо өлөштәрҙе, берәмектәрҙе тоташтырыусы, берләштереүсе цемент һымағыраҡ күҙ алдына баҫа. Ошондай сифатҡа эйә өлөштөң ныҡлығы быуатҡа яҡын ваҡыт һыҙымында һыналған икән, нигеҙендә "үҫтереү" идеяһы ятҡан институттың, тимәк, ғүмере оҙон буласаҡ. Мәғарифҡа, тимәк, кешелеккә ни тиклем үҫеш кәрәк булғанға тиклем.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ - Заһиҙә уйнай бит! - тигән тауыш ишетелде, һәм халыҡ араһынан ҡара мыйыҡлы, бейек йәш башҡорт килеп сыҡты. - Әй, юҡ, ниндәйҙер малай, беҙҙекеләрҙән былай. Кем һин, ҡустым, ҡайһы ырыуҙан?






Йәйге ҡояш түҙҙермәй ҡыҙҙыра бирҙе, баратора дала ла бөтөнләй йәнһеҙләнде: бер ағас та осрамай, бер ҡыуаҡ та күренмәй, ҡайҙа ҡарама - кибеп бөткән үлән менән ҡапланған тоҙло күлдәр, тик ҡайһы берҙә генә бәләкәй йылғалар осрап ҡуя. Яҡын-тирәлә кеше-маҙар күренмәһә, егет һыу инеп ала. Көндөҙ йоҡлай, кискә табан, эҫе бер аҙ баҫылғас, юлын дауам итә: ауылдарҙа ҡунғыһы килмәй уның. Кистәрен, берәй ауылға яҡынлашһа, ҡурай тарта башлай. Уны ҡыуанып ҡаршы алалар, уйнаталар, йырлаталар, унан ултыртып ашаталар, ҡымыҙ йә айран эсерәләр. Ҡайһы саҡ юлда туҡтатһалар, старшина йәки башлыҡтың исемен әйтә лә, артабан юлында була. Мәхмүт Гәрәйгә рәхмәт инде! Шулай итеп, ҡурайсы нуғай далаһын үтеп тә китте, һуңғы йәйләүҙең башлығы уны үҙенең дуҫына, ҡырғыҙ ауылы башлығына ебәрҙе. Был ауылда егет саҡ бәләгә тарыманы. Һеләүһен бүрке кейгән бәһлеүән бер ҡырғыҙ ҡурайсыға оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы, уның ҡыҫыҡ күҙҙәрендә ниндәйҙер осҡондар уйнап китте. Яман билдә! Ул ҡысҡырып көлөп ебәрҙе лә:

- Һин бит егет кеше түгел, - тине.

Ҡурайсы оялып китте.

- Юҡ, мин - егет.

- Ниңә һуң толомоңдо кәпәс аҫтына йәшерәһең?

- Башҡортостанда бар малайҙар шулай йөрөй...

Старшинаның ҡатыны, башҡорттан күҙҙәрен алмай, иренә ниҙер шыбырланы.

Тегенеһе һорауҙар яуҙырған ҡырғыҙға әйләнеп:

- Телеңде тый! - тине. - Был малай - минең ҡунағым, ул миңә Сәйфулла Янбаевтан сәләм алып килгән. Һин беҙҙә ҡунырһың, - тип малайға өндәште.

Ҡырғыҙ тымды, әммә күҙҙәре тағы ла ҡыҫығыраҡ булып китте.

Бер аҙҙан старшина ҡунағын үҙҙәренә алып ҡайтты. Инеүҙәре булды, старшинаның ҡатыны:

- Һин ниңә егет булып кейенгәнһең? - тип һораны.

Ҡунаҡ кеше шундуҡ барыһын һөйләп бирҙе.

- Эй, бахырҡай, - тип, ҡырғыҙ ҡатыны уны йәлләп ҡуйҙы.

- Һин ҡурҡма, - тине хужа, - бисәмдең ишаралауы булды, мин һине үҙебеҙгә саҡырырға ашыҡтым. Абдулла - алама кеше, һине ҡыуып етер ине ул. Ял итеп ал, таң еткәс, ҡуҙғалырһың.

Хужа кеше Заһиҙәгә сәстәрен киҫергә тәҡдим итте, ләкин Заһиҙәнең оҙон толомдары менән хушлашҡыһы килмәне. Хужабикә үҙе уның сәстәрен йыуып, һөйәктән яһалған тараҡ менән матурлап тараны ла, элеккесә итеп йыйып ҡуйҙы.

Таң яңы саҡ һыҙылып килә, ә Заһиҙә, хужалар менән хушлашып, юлға ла сыҡҡан.

Түҙгеһеҙ эҫе, яндырып алып барған ҡом буйлап атланы Заһиҙә, тәүлектәр буйы кеше торлағы ла, эсәр һыу ҙа күренмәне, ә ҡайһы саҡ, киреһенсә, ҡойма ямғырға тарыны.

Бер айҙан артыҡ барҙы ул, ниҙәр генә кисермәне үҙ юлында. Аллаларҙан ярҙам һораны, үҙен ҡурай моңо менән йыуатты. Ниһайәт, зарлы дала ла артта ҡалды, алда оло йылға күренде, ярҙарында үҫкән ҡамыштарының шаулауы ишетелде. Заһиҙә еңел тын алды - хәҙер инде Бохараға тиклем дә күп ҡалманы! Үҙенең ҡыуанысын ул ҡурайының моңонда сағылдырҙы. Ҡоштар уны тын ҡалып тыңланы, хатта йылғалағы балыҡтар ҙа, йөҙөүенән туҡтап, хайран ҡалды. Ҡамыш араһынан ниндәйҙер бесәйгә оҡшаған бер йән эйәһенең башы күренде, ул да, ергә ятып, көй тыңланы. Шул саҡ юлда тауыштар ишетелде. Заһиҙә алдында нуғайҙарға ла, ҡырғыҙҙарға ла оҡшамаған яңы кешеләр пәйҙә булды: улар үзбәктәр булып сыҡты. Заһиҙә, урынынан тороп, улар эргәһенә ашыҡты. Тегеләр туҡтап ҡалды. Заһиҙә һорауҙарын үзбәктәргә төбәне: Бохараға тиклем ни самаһы юл ҡалды, дөрөҫ барамы? Үзбәктәр тәүҙә өндәшмәйерәк торҙо - башҡорт телен аңламай улар. Ниһайәт, берәүһе төшөндө, шикелле, юл күрһәтте. Икенсеһе, тоҡсайының ауыҙын асып, икмәк, ҡауын, йөҙөм килтереп сығарҙы, Заһиҙәгә һондо.

Ғәжәп ерҙәр асылды Заһиҙәгә. Ап-аҡ өйҙәр теҙелгән, баҡсаларға күмелгән ауылдар күренә башланы, ә ауылда - алсаҡ йөҙлө ҡатындар, бейек кәүҙәле, ҡара һаҡаллы ирҙәр, һомғол буйлы егеттәр.

* * *

Бохара ифрат ҙур ҡала. Байтаҡ ерҙәр гиҙҙе Заһиҙә, әллә күпме ҡалала булды, бихисап кешеләр осратты, улар араһында башҡорттар ҙа бар ине, бөтәһенән дә Арыҫланы тураһында һорашты. Арыҫлан Рамзаев тигән кешене береһенең дә күргәне булмаған. Бер аҙҙан Бохарала йәш ҡурайсыны таный ҙа башланылар. Ауыл, ҡала баҙарҙарында сәкмән-салбар кейгән Заһиҙәнең килеп сығыуы була, тирә-яғына шундуҡ халыҡ йыйыла, уның йыр-моңон тыңлайҙар.

*Бохарала үҫкән ҡарбуҙҙарҙың,*
*Һуты ла ғына бар ҙа, тәме юҡ.*
*Арыҫланһыҙ үткән көндәремдең*
*Төҫө лә генә бар ҙа, йәме юҡ.*
*Сит илдәрҙә йөрөп, ил ҡыҙырып,*
*Ситеккәйҙәремде бөттөм*
*туҙҙырып.*
*Уралыма ҡайтып, ташҡа баҫып,*
*Булырмы икән ҡурай һыҙҙырып?*

Бохарала көн иткән халыҡтын, сит илдәрҙән килгән юлсыларҙың, ҡурайсы йырлаған йырҙарҙы аңламаһалар ҙа, тауышына иҫтәре китә. Тик башҡорттар ғына яҡташының йырын аңлай, көрһөнөп ҡуя:

- Дөрөҫөн генә йырлай ҙа ҡуя шул малай. Башҡортостандан да шәберәк ер юҡ шул! - тиҙәр.

- Ниндәй генә йыр йырламаһын, Арыҫлан тигән исем ҡуша ла йырлай.

Ҡалаларҙың береһендә, Заһиҙәнең йырын ишетеп, башҡорттар үҙ-ара һөйләшә башланы:

- Мырҙаның баҡсаһында эшләп йөрөгән Арыҫлан тураһында йырламаймы икән?

- Шулайҙыр шул: исеме Рамзаев Арыҫлан бит...

Ҡурайсынан һораша башланылар: ҡайһы ырыу кешеһе ул Арыҫлан, ниндәй ауылдан, ҡасаныраҡ иленән сығып киткән?

- Беләбеҙ уны! - тине башҡорттарҙың береһе. - Һин уны Бохара ҡалаһының үҙәгендә табырһың: Алабаев мырҙала өс кеше эшләйҙәр улар.

- Нисек эҙләп табайым икән уны? - Заһиҙә ҡыуанып китте.

- Баҙарға бар ҙа, үҙебеҙҙекеләрҙең береһен табып, Алабаев мырҙаның баҡсаларын һора. Арыҫландың үҙен дә осратырһың әле баҙарҙа.

Бигерәк ҙур шул Бохара, уны бөтә яҡындағы илдәрҙең-ерҙәрҙең, барса халыҡтың хужаһы - хан үҙенең өйө итеп һайлаған. Күп-күп таш өйҙәр, алтын айҙар менән биҙәлгән манаралар, тар, кәкрәйеп һуҙылған урамдар, ебәк туҡымалар тулып ятҡан баҙарҙар, тау-тау булып өйөлгән ҡарбуз-ҡауындар - барыһын да күрҙе Заһиҙә. Баҙарҙа халыҡтың төрлөһө бар - байы ла, ярлыһы ла, ялан аяҡлы ҡолдар ҙа тулып йөрөй. Заһиҙәнең күңеле тулып китте, йөрәге әрнеп, йыр һуҙҙы:

*Бохара ла тигән ай, ҡаланың*
*Урамдары бигерәк*
*тар икән, һай.*
*Байлығының даны таралһа ла,*
*Тормош тигәндәре зар икән.*
*Иртә менән тороп,*
*тышҡа сыҡтым*
*Таңғы һауаларҙы*
*һулайым тип, һай.*
*Сит илдәргә йәйәү*
*сығып киттем,*
*Арыҫлан атлы*
*ирҙе табайым, тип.*

Бер көн йырлай Заһиҙә, икенсе көн, тик Арыҫланы күренмәй халыҡ араһында. Заһиҙәнең йөрәге иренә ынтыла, тиҙерәк күргеһе килә уны. Тик Алабаев мырҙаның баҡсаларына бармай ул, Арыҫландың баҙарға килеп, таныш тауыш, ҡурай моңон ишетеп, ҡатынын таныуын көтә. Өсөнсө көн уйнай инде Заһиҙә баҙарҙа. Көтөүҙәре менән алыҫ яҡтарға сығып киткән, өҙөлөп көткән кәләшен, тыуған илен онотҡан башҡорт тураһында йырлай ул.

*Һауаларҙа осҡан, ай, ағуна*
*Ҡанаттары талһа, ҡағына.*
*Сит илдәргә киткән*
*йәргенәһен*
*Йәш кәләше зарығып һағына.*

- Заһиҙә уйнай бит! - тигән тауыш ишетелде, һәм халыҡ араһынан ҡара мыйыҡлы, бейек йәш башҡорт килеп сыҡты. - Әй, юҡ, ниндәйҙер малай, беҙҙекеләрҙән былай. Кем һин, ҡустым, ҡайһы ырыуҙан?

Заһиҙә ҡуңыр күҙҙәрен башҡортҡа төбәне.

- Эй, ахмаҡ! - тине ул. - Тауышын ишетеү етмәй уға, һорап тора тағы. Ҡара! - тигән һүҙҙәр менән Заһиҙә башындағы бүркен систе, уның ҡуйы сәстәре тулҡын-тулҡын булып яуырынына төштө...

- Заһиҙә! - башҡорт ҡысҡырып уҡ ебәрҙе .

- Мин булмай, кем булһын!

Йәш ҡатындың күҙҙәренән йәш атылды.

Аптырашта ҡалған халыҡтың күңеле күтәрелде, тауыштар ишетелде:

- Үәт ҡурайсы! Ай, малай! Егет булмай, ҡыҙ булып сыҡты!

* * *

Көҙ еткәс, ике дөйәгә ебәк туҡымалар тейәп, Заһиҙә менән Арыҫлан да ҡайтып төштө. Бар ауыл халҡы ҡаршыларына йүгереп сыҡты, бөтәһе лә уларҙың ҡулдарын ҡыҫып, ҡыуаныстарын белдерҙе:

- Икегеҙ ҙә ҡайтҡанһығыҙ икән! Бына бит шатлыҡ! Ай, Заһиҙә! Ирен тапҡан бит.

- Төп башына ултырттың беҙҙе, - тип көлөштө кейәү егеттәр, - ә беҙ, йүләрҙәр, көткән булабыҙ...

- Мин һеҙҙе алдаманым, - тип яуаплай Заһиҙә, - үҙемә ир таптым бит.

Бер аҙна буйы ауыл Заһиҙә менән Арыҫландың яңы туйын байрам итте. Йәштәр байрам хөрмәтенә бер ни йәлләмәне- һарыҡ, тана ите, ҡымыҙ, бал! Ә Заһиҙәнең ҡыҙҙарға тараҡан бүләктәре! Арыҫлан Бохарала ваҡытын бушҡа әрәм итмәгән шул - тыуған яҡтарына байтаҡ байлыҡ алып ҡайтты.

Башҡорттар һаман да Заһиҙәнең ҡыйыулығын онотмай: ҡурайсылар әлегәсә уның йырға маһирлығына, һөйөүенә һәм тоғролоғона дан йырлай.

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА тәржемәһе.**
**(Аҙағы).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# МӘКТӘПКӘ "ТӨКӘТМӘ"

**...Яңыраҡ Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылы мәктәбе янында милләтебеҙҙең бер ауылдан сыҡҡан күренекле шәхестәре: билдәле ғалим, әҙәбиәт белгесе Ким Әхмәтйәнов, арҙаҡлы ил ағаһы, дәүләт эшмәкәре, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев, мәшһүр шағир, драматург Рәмил Ҡолдәүләт хөрмәтенә музей асылды. Музей ошо шәхестәрҙең тормош һәм ижад юлын сағылдырған экспонаттар менән бик зауыҡлы итеп биҙәлгән. Әйтергә кәрәк, Әбйәлил районы хакимиәте етәкселегендә (башлығы - Рим Сыңғызов) барлыҡҡа килгән был музей мәктәпкә төкәтмә рәүешендә эшләнгән.**

Музейҙың ошолай мәктәпкә "төкәтмә" итеп һалыныуы оло мәғәнәгә эйә. "Төкәтмә" һүҙенең мәғәнәһе бик ябай, ул нимәгәлер төкәтеп яһалған, төкәтелгән ҡоролма, әйбер тигәнде аңлата. Урыҫса - "пристрой". Ә бит ошо музей-төкәтмәне Әлмөхәмәт мәктәбенең уҡыу-уҡытыу процесына өҫтәмә әсбап, уҡыусыларҙың үҙ ауылының, тыуған яғының тарихын, данлыҡлы шәхестәренең тормош һәм ижад юлын өйрәнеүгә өҫтәмә сығанаҡ тип тә аңлай һәм атай алабыҙ. Ҡыҫҡаһы, музейҙың бер стенаһы мәктәпкә тоташа икән, уҡыусыларҙың рухи булмышы ла халҡыбыҙ, уның арҙаҡлы шәхестәре рухынан айырылғыһыҙ.

Кем белә, бәлки, район хакимиәте финанс ауырлыҡ арҡаһында айырым музей төҙөргә форсат тапмай, төкәтмәгә туҡталғандыр. Шулай ҙа Бәйғәмбәребеҙ исемен йөрөткән Әлмөхәмәт ауылында барлыҡҡа килгән музей-төкәтмә исеме-есеме йәһәтенән бик ваҡытлы ҡоролма тип иҫәпләнергә хаҡлы. Был башланғысты башҡа райондар етәкселәре лә күтәреп алһын ине, тип теләге килә. Мәктәптәребеҙ, улай ғына ла түгел, милли мәғарифыбыҙ бындай "төкәтмә"ләргә ҙур мохтажлыҡ кисерә.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ЗАУЫҠ

# ҺЕҘ БУЛҒАНҒА ТАШҠА ӘЙЛӘНМӘНЕМ...

## Шағирәгә өс һорау

**2013 йылда Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына дәғүә итеүселәр араһында йәш шағирә Гөлнара Хәлфетдинова ла бар. Ул "Ҡыңғыраулы ғына яланда" исемле шиғырҙар йыйынтығы, 2012 йылда "Шоңҡар" һәм "Ағиҙел" журналдары, "Йәшлек" гәзитендә баҫылған шәлкемдәре өсөн һәм йөҙҙән ашыу балалар өсөн йыр текстары авторы булараҡ был абруйлы премияға тәҡдим ителә. Ошо уңайҙан Гөлнараға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек:**

**➔ Мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич исемендәге ижади премияға лайыҡ булыу өсөн яҡшы шиғыр, проза йә драма әҫәре ижад итеү, сценарий яҙыу, һүрәт яһау йә музыка сығарыу ғына етәме? Һиңенсә, был премияға дәғүә итеүсе ижадтан тыш тағы ла ниндәй талаптарға яуап бирергә тейеш, тип уйлайһың?**

- Шәйехзада Бабич ялҡынлы ижадсы ғына түгел, илһөйәр, телһөйәр һәм ҡаһарман сәйәсмән дә булған. Премияға уның исемен биргәндәр икән, тимәк, уны булдырыусылар дәғүәселәрҙе ниндәйҙер кимәлдә уның рухын йөрөткән, һис булмаһа, уға ҡайһы яғы менән дә булһа оҡшаш итеп күрергә теләгәндер, моғайын.

**➔ Һинең шиғырҙарыңдағы "Шатлыҡтарым ҡайғыралар, ҡыуана ҡайғыларым..." тигәнгә оҡшаған парадоксаль мотив ҡайҙан килә: был ұҙмаҡсатмы, әллә халәтең сағылышымы?**

- Мин ошондай һорауҙарға яуап бирергә яратмайым. Ижадта ниндәйҙер ұҙмаҡсат булыуы мөмкинме икән? Айырыуса шиғриәттә ҡәләм алып, яҙырға ултырғанда һеҙемтәлә ниндәй һын-һапатлы әҫәр килеп сығырын алдан күҙаллауы ҡыйын. Махсус рәүештә ниндәйҙер ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы тиҫбе тартҡандағы һымаҡ итеп теүәлләп, шиғырҙа ҡулланырмын әле тип, алдан барлап ултырырға тура килмәй, әлбиттә. Ләкин ниндәйҙер тормош күренештәре йә хәлдәре ҡайһы ваҡыт образ тыуыуға сәбәп булыуы мөмкиндер.

**➔ Һин үҙ тиҫтерҙәреңдең, әхирәттәреңдең милләтебеҙ киләсәге өсөн яуаплылығын ни рәүешле тояһың? Улар башҡаларҙан ҡайһы яғы менән айырыла?**

-Был бик сетерекле һорау. Аралашҡанда ла күптәр был хаҡта һөйләшеүҙәрҙе ипләп кенә урап үтергә тырыша. Һәр кемдең киләсәге балаһы менән бәйле. Ә ҡайһы берәүҙәрҙең йәмғиәттә милләт, милләт тип лаф ороп йөрөп тә, үҙ сабыйына үҙебеҙсә әкиәттәр һөйләмәүе, туған телен өйрәтмәүе берәүгә лә сер түгел. Икенсе яҡтан, кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың, тигән әйтем дә бар. Үҙеңә көслө һәм ихтыярлы булырға кәрәк. Был мәсьәләгә килгәндә, һәр кем эште үҙенән башларға тейештер, ә башҡаларҙы тикшереп, аҡыл өйрәтеп йөрөргә түгел. Ысынлап та, мине уратып алған мөхит, ә уны үҙең һайлайһың йә булмаһа тыуҙыраһың, сабыр аҡыллы һәм артыҡ ҡыҫҡырып тормай, ә иплән кенә эш менән була торған кешеләрҙән тора. Өфө ни тиклем ҙур ҡала булһа ла, һәр кем билдәле бер төркөм кешеләр менән генә аралашып йәшәй, үҙ мөхитендә ҡайнай. Мин әхирәттәремә һоҡланып бөтә алмайым, барыһының да балалары башҡортса яҡшы белә. Милләт өсөн яуаплылыҡ тойған һәр кешене балаларына ҡарап танып була торғандыр, иң гүзәл күрһәткес шул.

*Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА*

### Бер бүре бар минең йөрәгемдә

Бер бүре бар минең йөрәгемдә,
Олой торған төндә ҡарап айға.
Сабып йөрөй торған урын тапмай,
Һырт һыҙырып һәр бер ҡарағайға.

Бер бүре бар минең йөрәгемдә,
Һаҡ һәм өркәк, берсә бик зәһәрҙер.
Мәңге тере, үлем алмаҫ рухлы,
Бәхет микән, ә, бәлки, ҡәһәрҙер?..

Бер бүре бар минең йөрәгемдә,
Хыялымды ҡайсаҡ тамаҡлаған.
Тыуып өлгөрмәгән ҡыуанысты...
Был фажиғә мең ҡат ҡабатланған.

Бер бүре бар минең йөрәгемдә,
Оломай ул былай йөрөгәндә.
Барлыҡтарын белдерә ул йыртҡыс
Мин үҙемде үҙем ҡыйырһытҡас...

Бер бүре бар минең йөрәгемдә,
Мине минән ҡурсалаусы көстәр.
Бар хыялдар, булған өмөттәрем
Шул бүрегә буйһоноусы күстәр...

### Ҡәҙерле ғазаптарым

Өҙгөләнеү, әрнеү, күҙ йәштәрем -
Һәр береһе шундай ҡәҙерле.
Һеҙ ҙә шулай илаҡ күңелдәрҙе лә
Мәңге ҡәҙерләргә әҙерме?

Аҙап, ғазаптарым, бөләүҙәрем,
Онотмайым һеҙҙе, һеҙ ғәзиз!
Һеҙ булғанға бөгөн мин - ошолай,
Килешкәнбеҙ, шуға бергәбеҙ.

Еңелеүҙәр, һыныу, төңөлөүҙәр,
Ебәрмәйем, иҫтә йөрөгөҙ!
Кәрәк булдығыҙ бит ваҡытында,
Һабаҡ булды һәммә берегеҙ.

Бәхетемдән тороп ҡалыуҙарым,
Бәхетемдән күҙ яҙҙырған мәлдәр...
Һәр берегеҙ шундай ҡәҙерле лә,
Һәр берегеҙ шундай ғына йәлдәр.

Алмаштырмам һеҙҙе бер нәмәгә,
Юйырға ла риза түгелмен.
Һеҙ булғанға ташҡа әйләнмәнем,
Һеҙ арҡылы ергә түгелдем.

Өр-яңынан баш күтәрер өсөн,
Тағы йылмайырға өйрәнергә...
Ғазаптарым! Минең менән хәҙер
Йылмайығыҙ, ҡыуанығыҙ бергә!

### Беҙ булғанбыҙ, ахыры, пар ҡанат

Берәй ҡасан, берәй ерҙә икәү
Беҙ булғанбыҙ, ахыры, игеҙәк.
Йәндең йәнгә йәндәй аҡынлығын
Булмай башҡа төрлө нигеҙләп.

Беләм, ваҡыт әйтер - онотторам,
Беләм, ваҡыт барын тигеҙләр.
Мин еңмәмен һәм дә еңелмәҫмен,
Әгәр булһаҡ ысын игеҙҙәр.

Игеҙ, игеҙ, тимәк, көстәр тигеҙ,
Тырышмайыҡ өҫтөн ҡалырға.
Бер-беребеҙҙе нығыраҡ яраттырып,
Тәрәнерәк инәү һалырға.

Һуңғы тамсы хисең минә булһын,
Тигән булып, һурма йәнемдә.
Беләһең бит бер күрешер өсөн
Нисә дарья кисеп килгәнемдә.

Һин үҙең дә бер күҙ һалыр өсөн
Артылаһың етмеш артылыш.
Икәү бергә берәү булабыҙ ҙа,
Айырылһаҡ - тағы яртылаш.

Табылғанда юғалтыуҙар тойоу,
Юғалыуҙар бер табылыр хаҡҡа...
Хыялдарҙа хыялыҙар булып
Талпыныуҙар бик бәхетле саҡҡа.

Беҙ булғанбыҙ, ахыры, пар ҡанаттар
Берәй ҡасан, берәй ерҙәрҙә.
Бәхетебеҙ ҡанатһыҙ ҡош һымаҡ
Мәжбүр мәңге беҙҙе эҙләргә.

### Һине һағынып бөтөп була микән?

Һине һағынып бөтөп була микән,
Яратыуҙан туйып була микән...
Минең йөрәк мөлдөрәмә хистән,
Һинеке лә шулай тулы микән?

Гонаһмы был, әллә киреһенсә
Юл күрһәткән Хыҙыр ҡулы микән?
Тамуҡҡамы беҙҙе бәхет илтер,
Әллә, әллә, ҡотолоу юлы микән?

Һине күреп туйып була микән,
Был хәтлемде тойоп була микән?
Үҙ-үҙеңә һыймаҫ был халәттә
Йөрәктәрҙе тыйып була микән?

Һине белмәй нисек йәшәгәнмен,
Әллә йәшәмәнем микән һинһеҙ?
Был һөйөүгә тиңләр һүҙ тапмайым,
Был мөхәббәт тиңһеҙ, тиңһеҙ, тиңһеҙ...

Ул йәшәмәй ерҙә һинһеҙ, минһеҙ,
Ул бул(а) алмай бынан ары өнһөҙ.
Яҙмыш ҡына тиҫкәре һәм кире,
Яҙмыш ҡына әллә нинә һөмһөҙ...

Яҙмыш ҡына ник киреһен яҙа,
Һөйөү түгел, йәнәһе, был маҙа.
Үҙе һаман сәпкә тейә алмай,
Яҙғандарын ҡара - яҙа-йоҙа.

Һине һағынып бөтөп була микән,
Була микән яныуҙарҙы баҫып?
Яҙмағанды яҙып була микән
Яҙмыш дәфтәрҙәрен яңынан асып?

Яҙмағанды алып була микән,
Түләй алмағанда яҙҙырып?
Мөхәббәтте һаҡлап була микән
Яҙмыштарҙың күҙен яҙҙырып...

Һине һағынып бөтөп була микән,
Яратыуҙан була микән туйып?
Һыуға яҙам, һауаларға яҙам,
Яҙмыш дәфтәрҙәрен ситкә ҡуйып...

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгә еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ДОНЪЯБЫҘҘЫ... йәштәр үҙ ҡулына алһын...

**Кинйә КУСКИЛДИН, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, БР Туризм индустрияны берләге рәйесе:** Бөгөнгө заманды халҡыбыҙ өсөн үҙенә күрә бер һынау мәле, тип атарға булалыр, моғайын. Күп эшлекле мәсьәләләрҙең башлыса иҡтисад закондары буйынса алып барылыуы, юридик закондарҙың тиҙ үҙгәреүе - былар барыһы ла хәҙерге кешенең алдына бер һынау булып килеп баҫты ла, күптәребеҙҙе хатта күңел төшөнкөлөгөнә дусар итте. Шулай ҙа, бер яҡтан, был көртәләр алдында ла юғалып ҡалмаҫ милләттәштәребеҙ күп - матур, өмөтлө йәштәр хаҡында әйтәм. Эйе, йәштәрҙең ҡайһы бер фекерҙәре, айырым осраҡта, донъяға ҡарашы ла урта һәм оло быуын вәкилдәренекенән ҡырҡа айырыла.

Замана һынауҙары алдында албырғап ҡалмайыҡ, халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булһын, тиһәк, беҙ тап ошондай йәштәребеҙҙе үҫтерергә тырышырға тейешбеҙ. Тәү siратта йәш быуында иман, күңел таҙалығы, изге күңеллелек тәрбиәләнергә тейеш. Яҡшы Кеше булыуҙы өҫтөнөрәк ҡуйырға өйрәнергә тейешбеҙ. Сөнки белеме булып та, күңелендә яҡтылыҡ сатҡылары булмаған кешенән файҙа ла, фәтеүә лә юҡ. Киреһенсә, күңеле яҡты, йөрәге асыҡ, тәүфиҡле кешенең халҡына килтергән файҙаһы ла ҙур була. Ундайҙар буш-юҡҡа сәбәләнеп бармай.

Ә хәҙер иғтибарыбыҙҙы рухи донъянан матди донъя темаһына йүнәлтәйек. Ни тиһәк тә, матди донъяны ла дөрөҫ ҡабул итергә кәрәк. Әйтәйек, телмәребеҙ башында телгә алып үткән иҡтисад темаһына туҡталайыҡ. Иҡтисад буйынса ла белемебеҙҙе үҫтерергә тейешбеҙ. Сөнки бөгөнгө заманда һәр нәмәнең һаны, үлсәме, хаҡы бар. "Бөтә нәмәне лә һатып алып була" тип йәшәгән кешеләр араһында йәшәүебеҙҙе лә оноторға ярамай. Тап бына ошо заманда беҙгә килем килтерә торған ҡайһы бер байлыҡтарыбыҙҙы ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ине. Тәү сиратта - еребеҙҙе. Әгәр беҙ үҙебеҙ сараһын табып, шағир әйткән "Хоҙай үҙе ҡыҙығыр..." урман-тауҙарыбыҙҙы, йылға-күлдәребеҙҙе ҡуртымға алып булһа ла ҡалмаһаҡ, был йүнәлештә эшләүсе бөтәндәр килеүе бар. Ул сағында, күҙ алдына килтереүе лә аяныс - ер-һыуҙарыбыҙҙы файҙаланыуҙан да ситтә тороп ҡалыуыбыҙ мөмкин. Шуға күрә, йәштәрҙең быны аңлауы кәрәк. Әммә бындай эштәрҙе аҙағынаса атҡарып сығарыу өсөн иҡтисадсы һөнәре генә етмәй - юридик белемле булыу ҙа төп шарттарҙың береһе.

Үҙебеҙҙең эшмәкәрлеккә килгәндә, беҙ туризм йүнәлешендә уңышлы эшләйбеҙ - халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен сағылдырған маршруттар ҙа төҙөп, йөҙәр меңләгән турист халҡына тәҡдим итәбеҙ. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙ тәбиғәтенең даны сит өлкәләргә, хатта сит илдәргә лә тарала барыуы ҡыуандыра.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Ошондай ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланып бөтә алмайым. Улар нисек тә булһа ир-ат абруйын һаҡлап ҡалырға тырыша. Ундай ғаиләләргә беҙ донорлыҡ енси ҡүҙәнәк тәҡдим итәбеҙ. Күп кенә ғаилә шул арҡала балалы булды.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘТЕРҘЕ...

## розмарин ныҒыта

■ XIX быуат уртаһында башланған Альп боҙлоҡтары иреүенең төп сәбәбе булып паровоздар һәм фабрикалар мөрйәләренән сыҡҡан ҡором тора, тип иҫәпләй Инсбрук белгестәре (Австрия). Билдәле булыуынса, Альп тауҙарында боҙлоҡтар юғала башлауы яҡынса 1850 йылда уҡ, йәғни глобаль йылыныуға тиклем башланған. Ғалимдар быны сәбәптәрен күптән эҙләй ине. Австрия белгестәре тарихи сығанаҡтарҙы ла, боҙлоҡтарҙың үҙен дә тикшергән. Бәҡтиһәң, әле ун туғыҙынсы быуатта уҡ кешеләр сәнәғәт арҡаһында һауаның бысраныуы һәм Инсбрук ҡалаһында урамда кер киптерә алмауҙарына зарланған. Боҙлоҡтарҙа 4 450 һәм 3 900 метр бейеклегенән алынған боҙ анализы күрһәтеүенсә, яҡынса 1860 йылдарҙа уларға ултырған ҡором ҡатламы ҡырҡа күтәрелгән. Ғалимдар фекеренсә, ҡором ҡояштың нурын үҙенә тартып, боҙлоҡтарҙың иреүенә килтергән.

■ Хуш еҫле мәңге йәшел ҡыуаҡлыҡ - розмарин хәтерҙе ныҒыта. Етмәһә, күптән онотолған әйберҙәрҙе хәтерләргә мөмкинлек бирә, тип белдерә Харрогиттағы Британия психологик йәмғиәте (Бөйөк Британия). Розмариндың эфир майы баш мейеһенә химик тәьҫир яһап, мейенең мөмкинлектәрен тағы ла көсәйтеп ебәрә. Быға тиклем яһалған асыштар күрһәтеүенсә, розмариндағы берләшмәләр оҙайлы хәтерҙе ныҒыта һәм аҡыл эшмәкәрлеген яҡшырта. Ғалимдар ошоно нигеҙ итеп алып, ике төркөмдә һынауҙар үткәреп ҡараған. Был төркөмдәрҙең береһе розмарин еҫе сығып торған бүлмәгә урынлаштырылған. Һуңынан улар хәтерҙе тикшереү өсөн төрлө тестар эшләгән. Һөҙөмтәлә, розмарин еҫен һулаған төркөм мәсьәләләрҙе яҡшыраҡ үтәгән. Уларҙың ҡанында 1,8-цинеолдың юғары кимәле билдәләнгән. Был берләшмә розмарин майында бар. Тап ошо берләшмә организмда хәтергә тәьҫир итеүсе химик системаға йоғонто яһай.

■ Миннесота университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ҡатын-ҡыҙ ҡиммәтле сумкалар һәм люкс класындағы әйберҙәрҙе һатып алып, көндәштәренән өҫтөнөрәк булырға һәм ир-егет менән мөнәсәбәттәрен һаҡлап ҡалырға теләй. Белгестәр үткәргән бер нисә экспериментта ҡатын-ҡыҙҙарға үҙҙәренең һөйгәндәрен ниндәйҙер бер ҡисәлә икенсе ғүзәл заттар менән аралаша икәнлеген күҙ алдына килтереүҙәрен һораған. Бынан һуң ҡатын-ҡыҙҙарҙа тап мөнәсәбәттәрҙе һаҡлап ҡалыу маҡсатында ҡиммәтле әйберҙәргә тартылыу барлыҡҡа килгән. Һөҙөмтәлә, төп төркөмдәге ҡатындар сумкаларҙа, аяҡ кейемендә, футболкаларҙа һәм автомобилдәрҙә люкс маркаһына ингән логотиптарҙы ҡыҙғаныу тойғолары тикшереүгә дусар ителмәгән контроль төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға ҙурыраҡ итеп төшөргән. Ҡатнашыусылар билдәләүенсә, улар ҡатыны затлы кейенгән ир-егеткә күҙ һалырға ҡыймаясаҡ, сөнки ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте уның иренең тоғролоғо тураһында һөйләй. Шулай итеп, ҡатындар затлы кейемдәрҙе ирҙәр өсөн түгел, тәү сиратта, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн кейә. Дизайнер сумкалары башҡа ҡатын-ҡыҙҙар өсөн үҙенсәлекле сигнал булып тора. Улар ғүзәл затты бәхетлерәк итә, уларҙың статусы тураһында һөйләй һәм көндәштәрен ситкә ҡыуа, ти психологтар.

ТАБИПТЫҢ ӘЙТКӘНЕ

**Шулай тип яҙғайны үҙенең бер шиғырында "Юлдаш" радиоканалының баш мөхәррире Миләүшә Ғәлиева. Ысынлап та, бала - ул Аллаһы Тәғәлә тарафынан ата менән әсәгә генә түгел, тотош Кешелеккә бирелгән иң ҙур мөғжизәләрҙең береһеләр. Ул хатта тылсымлы елем кеүек, ғаиләлә бына-бына өҙөләргә торған мөнәсәбәттәрҙе ялғаусы ла, бер-береһенә үпкәләп, сәғәттәр, көндәр буйы һөйләшмәй йөрөүселәрҙең "телен асыусы" ла, ҡолаҡ тондорор тынлыҡты "ярыусы" ла, туңып барған йөрәктәр араһына күҙгә күренмәҫ күпер һалыусы ла... Эйе, быны бары тик балалары булған ғаиләләр генә тойоп, белеп, күрергә һәләтле. Әммә күпмеләре йәшлек хатаһы менән был бәхеттән мәхрүм. Заман ҡаҙаныштары бер урында ғына тормай, кешелек, хатта тәбиғәткә ҡаршы барып булһа ла, бушлыҡты тултырырға тырыша. 2003 йылда асылған Республика перинаталь үҙәге бөгөн төрлө сәбәптәр арҡаһында бала һөйөү бәхетенән мәхрүмдәргә ярҙам итә. Уларҙың ярҙамы менән бихисап ата-әсә тулы ғаилә бәхетен кисерә. Бөгөн уҡыусыларыбыҙға Үҙәктең репродуктив технологиялар бүлеге мөдире Рәмилә ҮҘӘНБАЕВАның ошо ғына түгел, тәрбиә, тармаҡты оптималләштереү, ябай ғына кешелек мөнәсәбәттәре һ.б. хаҡындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ЯРАЙ ӘЛЕ БАЛАМ КӨЛӘ БЕЛӘ -



## шартлап киткән кеүек был тынлыҡ...

### Атта ла бар, тәртәлә лә...

Элек-электән ғаиләлә бала булмаһа, төп ғәйепте ҡатын-ҡыҙға япһарҙылар. Ир-ат, әгәр енси тормош менән йәшәй ала икән, үҙен һәр ваҡытта ла үрсемле тип һанаған. Әммә бөгөнгө хәҡиҡәт шуны күрһәтә: бала ярлыһын өсөн ике енес тә һау-сәләмәт булырға тейеш. Ләкин ғаиләлә бала булмағанда барыбер ҙә ҡатын-ҡыҙ күберәк борсола, дауахана юлдарын тапай башлай. Тикшеренеүҙәр үтеп тә, ҡатын-ҡыҙҙа бала таба алмаҫлыҡ сәбәпте асыҡлай алмайҙар икән, ул юллама алып, беҙҙең Перинаталь үҙәккә килә һәм ҡабат тикшеренеүҙәр үтә, дауалана. Шунда ла балаһыҙлыҡ сәбәбе табылмаһа, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрен арҡан менән һөйрәп тигәндәй беҙгә алып килергә тейеш була. Ләкин ирҙәр үҙҙәрен ғәйепле һанамай һәм беҙгә килергә атлығып тормай. Ахырҙа, ғәйептең тап ир-атта булыуы асыҡлана. Көслө зат өсөн, әлбиттә, был факт бик аяныслы, улар быны бик ауыр кисерә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғүзәл зат, ярай, проблема иремдә икәнен белмәһендәр, тип, бөтөн ғәйепте үҙенә ала. Ошондай ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланып бөтә алмайым. Улар нисек тә булһа ир-ат абруйын һаҡлап ҡалырға тырыша. Ундай ғаиләләргә беҙ донорлыҡ енси күҙәнәк тәҡдим итәбеҙ. Күп кенә ғаилә шул арҡала балалы булды. Әгәр ғаилә 10-15, хатта 5-6 йыл балаһыҙ йәшәй икән, улар мөхәббәттәрен һаҡлап, бер-береһенә ихтирам йөҙөнән йәшәй бирәләр. Күп осраҡта шундай оҙаҡ бергә йәшәүсе балаһыҙ ғаиләләр түлһеҙлек буйынса тикшеренеүгә икеүләшеп киләләр.

Әгәр ҙә 2006 йылдан, беҙҙең бүлек асылғандан алып сағыштырып ҡарағанда, ыңғай үҙгәреш бар. Хәҙер ирҙәр үҙҙәре шылтыратып, ҡатындарын сиратҡа яҙҙыралар, йәиһә үҙҙәре килеп, сират алып ултыралар. Был ҡыуаныслы. Сөнки ғаиләлә түлһеҙлек бар икән, тәү сиратта, ирҙәр ҙә тикшерергә кәрәк. Уларҙы тикшереүе енелерәк. Әгәр анализда енси орлоҡтар етеш кимәлдә, ауырыуҙар юҡ икән, ҡатын-ҡыҙҙы тикшереүгә күсәбеҙ. Шуға күрә ир-ат был мәсьәләгә етди ҡараһын, бөтөн ғәйепте ғүзәл затҡа ғына ҡайтарып ҡалдырмаһын ине.

### Сирен йәшергән...

Бөгөн түлһеҙлек демографияға ғына ҡағылмай, ул психология, социаль өлкәгә лә ҡағылған мәсьәлә. Мәҫәлән, психология күҙлегенән ҡарағанда, балаһыҙ ғаилә туғандарынан, ата-әсәһенән, коллегаларынан тартына, кәмһенә башлай. Шулай кәмһенеү барлыҡҡа килә. Улар кеше менән аралашыуҙан, балалары булған ғаиләләргә ҡунаҡҡа барыуҙан ситләшә, үҙҙәренә бикләнеп йәшәй башлай. Өҫтәүенә, алда әйтеп китеүемсә, нигеҙҙә ғәйепте ҡатын-ҡыҙға япһаралар һәм уны кәмһетеүҙәр, хурлауҙар ҙа башланыуы мөмкин.

Быңдай комплекс бигерәк тә беҙҙең башҡорт халҡына хас, сөнки өйҙәге серҙе тышҡа сығармаҫҡа, ауыҙың тулы ҡан булһа ла төкөрмәҫкә, ул ғына ла түгел, динебеҙ буйынса ла интим мәсьәләләр кеше күҙенән йәшерен булырға тейеш, тип иҫәпләнә бит инде. Шуға ла беҙҙең Үҙәккә лә йәшерен генә, туғандары, районлаштары, таныштары күреп ҡалмаһын, тип, ҡасып-боҫоп киләләр. Ә бит проблеманы йәшереп ҡалдырыу менән ул хәл ителмәй, бары тик тәрәнәйеүе, ҡәҙерле ваҡыттың ҡулдан ысҡындырылыуы мөмкин. Шуларҙы күҙ уңында тотоп, ҡатындары үҙҙәре генә мөрәжәғәт иткәндә, уларҙың ирҙәре менән телефон аша булһа ла һөйләшеп, беҙҙән ярҙам алырға инандырырға тырышабыҙ.

Икенсе яҡтан, күп ғаиләләр, сит илдәге кеүек, бала табыуҙы кисектереүҙе хуп күрә. Ҡатын-ҡыҙ иң тәүгә урынға юғары белем алыуҙы, һөйбәт эш табыуҙы, карьера эшләүҙе, матди хәлен ныҒытыуҙы ҡуя. Барыһын да булдырғас, ҡайҙалыр ял итергә сығып китә. 35 йәште үткәс кенә үҙенә насип ишен табып, бала тураһында уйлай башлай. Хатта күптәре донорлыҡ программаһына мөрәжәғәт итеп, яңғыҙ булһа ла бала таба.

Ләкин шуны онотorға ярамай: кешенең организмы йәш үтеү менән ҡартая. 35 йәштән һуң репродуктив ҡеүәт 50 процентҡа кәмей. Шулай уҡ был йәштә организмда төрлө сирҙәр - һимереү, ҡан баҫымы күтәрелеүе, шәкәр сире йәиһә инфекциялар, стрестар һ.б. уҙ эҙемтәһен ҡалдыра һәм ҡатын-ҡыҙҙың ауырға ҡалыуын ҡатмарлаштыра. Шуның өсөн бала табыуҙы алдан планлаштырырға кәрәк. Беренсе бала табыу өсөн иң ҡулай мәл - 20-25 йәш. Балаларҙың йәш араһы ике йыл ярым, өс йыл булырға тейеш. Әлбиттә, Бөтә донья һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы репродуктив йәш тип 18-49 йәште билдәләй. Әммә был ҡатын-ҡыҙҙың организмы потенциалы күрһәткесе генә. Ысынбарлыҡта, кемдендер 54 йәшендә лә бала табырға һәләте бар. Һәр кемдең организмы үҙенсәлекле.

### Тәрбиә ғаиләнән башлана

Ҡыҙ бала тыуғас та, беҙ уны булаҫаҡ әсәй итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ. Ул бәләкәй саҡтан уҡ шәхси гигиена, теш таҙартыу, сәс тарау, үҙенде таҙа йөрөтөргә өйрәнеү менән бер рәттән, күрем функцияһы тураһында ла әсәйҙәрҙән ишетеп белергә, шулай уҡ үҙен һаҡларға: йылы кейенеп йөрөргә, енси физиологик күренештәре тотҡарлана икән, әсәһенә мөрәжәғәт итергә тейеш. Шундай осраҡтар күп, йәш ҡыҙҙар күрем килеүен көтөп йөрөйҙәр ҙә, килмәһә, булыр әле, тип һуңлап килтәләр. Ҡайһы берҙә 18-19 йәштә генә табиптарға мөрәжәғәт итәләр. Әгәр ҙә уларҙы әсәләре беҙгә иртәрәк алып килгән булһа, ул ваҡытта уның сирен кисектереп булыр ине. Ә һуңлаған осраҡта ярҙам итеү мөмкин түгел. Шуны ла әйтергә кәрәк, ҡатын-ҡыҙға тыумыштан әсәнән генетик банк-база бирелә һәм беҙ шуның менән йәшәйбеҙ, тыумыштан һалынған потенциалды - миллиондан ашыу күҙәнәкте яйлап ҡына кәметәбеҙ. Ир-егеттәрҙең иһә енси күҙәнәктәре һәр 72 көн һайын барлыҡҡа килеп тора. Ҡатын-ҡыҙ ошо хаҡта белергә тейеш. Күптәр, ә беҙ белмәнек, ти. Һуңғы ваҡытта, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар уҙ сәләмәтлегенә иғтибарлыраҡ була башланы, тиер инем. Әммә һәт биҙҙәренә иғтибар тейешле кимәлдә түгел. Һәт биҙҙәрен йыл һайын тикшертеп тороу зарур, сөнки күп кенә ҡатын-ҡыҙҙар яман шеш 3-4-се стадияға еткәс кенә мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ кәүҙә ауырлығына иғтибар итеү ҙә кәрәк. Ҡапыл ауырлығыңыҙ артып йәки ҡапыл кәмеп китте икән, эндокринологҡа барып ҡаралыу кәрәк. Хәҙер белгестәр күп. Бигерәк тә

бала табырға әҙерләнгән ҡатын-ҡыҙ барлыҡ тикшеренеүҙәрҙе үтеп, дауаланып, һуңынан ғына ауырға ҡалһын ине. Юғиһә, беҙҙә киреһенсә килеп сыға: ауырға ҡалалар ҙа, шунан ғына дауалана башлайҙар. Беҙгә баланың һаулығын һаҡлау урынына ҡатындың сәләмәтлеген хәстәрләргә тура килә.

Шулай уҡ малайҙарҙың да һаулығына иғтибарлы булырға кәрәк. Был - атайҙарҙың төп бурысы. Улар улдарын ир-егет итеп тәрбиәләргә, шәхси гигиенаға өйрәтергә тейеш. Малайҙарҙың бигерәк тә сананан, аттан, велосипедтан һ.б. ҡолап төшөүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Шулай уҡ ирҙәрҙең түлһеҙлегенә тәмәке тартыу, араҡы, күпләп һыра эсеү килтерә. Мунсала эҫе итеп сабыныу ҙа, эҫе саунала ултырыу ҙа, автомобиль ултырғыстарын ҡыҙҙырып, йылытып йөрөү ҙә ир-егеттәргә кире тәьҫир итә. Әлеге ваҡытта бәләкәй малайҙарға памперс кейҙерәләр. Был ҡасан да булһа үҙенең эҙемтәһен бирәсәк. Ғөмүмән, малайҙарға ғына түгел, ҡыҙҙарға ла бала саҡта памперс кейҙереүгә ҡаршымын. Эйе, әсә өсөн улар бик уңайлы, әммә киләсәктә баланды ниндәй физиологик үҙгәрештәр көтөүен берәү ҙә әйтә алмай.

## Сирҙәр башта ярала…

Әгәр ғаилә парҙары бер йыл йәшәп тә бала юҡ икән, ә инде 35 йәштән үтеүселәр, алты айҙан һуң врачтарға мөрәжәғәт итергә тейеш. Түлһеҙлек сәбәптәренә килгәндә, бында ҡатын-ҡыҙҙар менән ирҙәрҙең нисбәте бер үк - 45-әр процент. Ҡалған 10-15 проценттың түлһеҙлеге сәбәбе аңлашылмай. Йәғни ир ҙә, ҡатын да һап-һау, ә балалары юҡ. Бында төп сәбәп психологик барьерҙа, йәғни сәбәп башта, төпкө аңда булыуы мөмкин. Ҡасандыр ғаилә бала теләмәгән, организм шуны үҙенә бойороҡ итеп алған һәм шул сикләүҙе бөгөн емерергә кәрәк. Ҡайһы ваҡыт ундай ғаиләләр менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп ултырыу ҙа етә. Үҙ тәжрибәмдә генә шундай өс-дүрт ғаилә булды, килеп, һөйләшеп, тынысланып ҡайтҡандан һуң, күп тә үтмәй, ҡатындары, ауырлымын, тип ҡыуанып шылтыратты. Тимәк, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү ваҡытында төпкө аңда ятҡан психологик барьер алып ташланған. Шуға ҡайһы берҙә беҙгә мөрәжәғәт иткән ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ир-егеттәрҙе психологҡа йүнәлтәбеҙ. Улар белгескә үҙҙәренең бала саҡтан килгән, төпкө аңда һаҡланған кисерештәре, ғаиләлә ишетепме, ата-әсәһенең берәй ҡылығын күрепме кисергән стрестары тураһында һөйләп, үҙендә ғүмер буйы йөрөткән ауыр йөктән ҡотола.

Шулай уҡ бик һирәк парҙарҙа тап килмәү ҙә бар. Ундай ғаиләләрҙә ир ҙә, ҡатын да һау-сәләмәт, әммә балалары юҡ. Айырылышып, икенсе ғаилә ҡорғас, ике ғаиләлә лә балалар тыуа. Әммә бындай тап килмәү булған ғаиләләрҙең ҡайһы берҙәре оҙаҡ йылдар бергә булып, артабан да бер-береһенән айырым йәшәүҙе күҙ алдына килтермәгән осраҡта ғына репродуктив технологиялар ярҙамына мөрәжәғәт итә.

## Ҡәҙерле һәм һөйөклөләр…

Бөгөнгә Ер шарында 5 миллиондан ашыу бала ЭКО процедураһы ярҙамында тыуған. Уларға күп тикшеренеүҙәр үткәрелә, һаулыҡ тороштары буйынса статистика алып барыла. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шундай һығымта яһалған: ошо процедура ярҙамында тыуған балалар физик яҡтан да, менталь яҡтан да, психик тороштары яғынан да тәбиғи рәүештә яралып тыуған балаларҙан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Бәлки, төп айырмаһы шунда ғыналыр: күп ғаиләләр нисәләр йыл бергә йәшәп, матди яҡтан аяҡҡа ныҡлап баҫып тора, бөтөн нәмә булдырған, тик балалары ғына юҡ; шуның өсөн бала тыуғас, улар бөтөн иғтибарын, бөтөн наҙын ошо балаға йүнәлтә. Был бала бер нәмәлә лә мохтажлыҡ кисермәй. Ата-әсәнең иғтибарын күберәк тойоуҙары арҡаһында хатта ғәҙәти балаларға ҡарағанда тиҙерәк үҫешәләр. Бындай балалар араһында бала табыу йорттарында ҡалдырылған балалар юҡ.

Тағы шуны әйтеп китер инем: йәш олоғая барған һайын, кеше организмында мутациялар булыуы ихтимал, был инде баланың патологиялар, хромосома аномалиялары менән тыуыу ихтималлығын арттыра. Беҙҙең үҙәктә яралған һәм тыуған балаларға бындай ҡурҡыныс янамай. Сөнки медик-генетик консультацияла перинаталь диагностика тигән бүлек асылды. Был инде ғәрип балалар тыумаһын өсөн яралғыға 11-13, 22-24, 32-34 аҙнала скринингтар үткәреүҙе күҙаллай. УЗИ, биохимик маркерҙар ярҙамында ла тикшереүҙәр булып тора. Әгәр ошо молекуляр-генетик кимәлдә йәки биохимик үҙгәрештәр булһа, был яралғыны медицина күрһәткестәренә нигеҙләнеп, өҙөргә була. Шуның менән беҙ инвалид, ғәрип балаларҙың тыуыуын кәметәбеҙ. Әгәр ниндәйҙер ауырыуҙы корректировкалау мөмкин икән, бала тыуғас та ул белгестәргә ебәрелә һәм улар шунда уҡ, мәҫәлән, йөрәк, ашҡаҙан сирҙәре булһа, бала организмына корректировка яһай.

Быйыл тағы бер яңылыҡ индерергә уйлайбыҙ. Йәғни эмбрионды әсәнең бала ятҡылығына күсерер алдынан уны генетик аномалияларға тикшерәбеҙ. Нәҫелдән күсеүсе сирҙәрҙе булдырмаҫ өсөн имплантация алдынан генетик диагностика эшләнеләсәк. Был бик уникаль ҡоролма. Унда инвертор микроскоп ҡулланыла, микроманипуляторы, лазер ҡулайламаһы бар. Әгәр ир-аттың енси күҙәнәген бөгөн 400 тапҡырға ҙурайтып ҡараһаҡ, был аппаратура 6200 тапҡырға ҙурайтыу, хатта эмбриондың эсендә хирургик операциялар эшләү мөмкинлеген бирә был аппарат. Уның менән эшләй башлаһаҡ, Европа стандартына инәсәкбеҙ. Был бөгөнгө көндә ҙур ҡаҙаныш буласаҡ.

Беҙҙә тағы шундай программа бар: бер ҡатындан бер нисә, мәҫәлән, 10-12 дана күҙәнәк алабыҙ. Әммә әсәнең бала ятҡылығына ике генә эмбрионды күсерәбеҙ. Ҡалған эмбриондарҙы туңдырабыҙ. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ беренсе тапҡырҙан уҡ ауырға ҡалһа - бик һәйбәт. Балаһы тыуғандан һуң ике-өс йылдан һуң килеп мөрәжәғәт итһә, беҙ шул ҡалған эмбриондарҙы иретеп, әсәнең бала ятҡылығына күсерәбеҙ. Был ваҡытта әсә гормональ көсөргәнеш кисермәй.

## Технологиялар үҫә, бәйләнештәр өҙөлә

Тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә ҡағылған оптималләштереү медицина өлкәһендә лә бара. Элек бәләкәй генә ауылда ла фельдшер-акушер пункттары була торғайны. Хәҙер уларҙың ябылыуы аяныслы. Технологиялар алға киткән һайын, ауыл халҡынан алыҫлаша барған һымаҡбыҙ. Әгәр ауыл ерҙәрендә, ауыл биләмәһендә бәләкәй генә участка дауаханалары булһа, ҡатын-ҡыҙ сирләп китһә, үҙенең ауылынан, көткән донъяһынан алыҫ түгел ерҙә дауалана, төрлө белгестәргә күренә, шулай уҡ балаларын педиатрҙарға алып барып күрһәтә алһалар, был бик һәйбәт булыр ине. Хәҙер медицина учреждениеларын территориаль йәһәттән эреләтеүҙе халыҡты медицина күҙәтеүенән мәхрүм ҡалдырыу тип ҡарайым һәм был, әлбиттә, кире күренеш. Ҡасан ниндәй сир менән ауырып китереңде алдан белеп булмай, шуға күрә медицина көндәлек тормошобоҙҙа халыҡҡа яҡыныраҡ булырға тейеш. Ауыл кешеһенә 500 саҡырым үтеп, баш ҡалаға килеүе лә еңел түгел. Әгәр инде балаһыҙ ғаиләләр ниәт итеп, беҙҙең Үҙәккә килергә теләй икән, уларға бары тик йәшәгән районларындағы медицина учреждениеһынан йүнәлтмә алырға ғына кәрәк. Был осраҡта Хөкүмәт тарафынан гарантияланған программа буйынса тикшерелеү һәм дауаланыу бушлай. Әгәр ошо программала ҡаралған хеҙмәттәрҙән (медик-генетик анализ, консультациялар, ауырлы ҡатындарға билдәле ваҡыттарҙа скрининг, УЗИ һ.б.) тыш, икенсе тикшеренеүҙәр кәрәкһә, улары инде түләүле. Беҙҙә шулай уҡ стационар эшләй. Йөклөлөк ауырлыҡ менән үтһә, ниндәйҙер хәүеф булһа, улар барыһы ла беҙҙең Үҙәккә оҙатылып, диагностикалауҙы һәм кәрәкле процедураларҙы бушлай ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**...Бер ваҡыт был донъяның түбәнгә тәгәрәүенә, иман бөтөүенә, ҡасандыр юғары тип һаналған ҡиммәттәрҙең бәҫе китеүенә аптыраған бер бәндә Аллаһы Тәғәләгә: "Эй, Тәңрем, ниңә һин беҙҙең донъяны ҡотҡарырҙай, иман, ҡот, бәрәкәт килтерерҙәй кешеләренде ебәрмәйһең?" - тип мөрәжәғәт иткән, имеш. Уға йыһан киңлегенән шундай яуап килгән: "Мин уларҙы һеҙгә ебәреп торам, әммә һеҙ бит уларҙы тыумаҫ элек үк үлтерәһегеҙ!" Бындай хәл булғанмы, юҡмы, билдәһеҙ, ләкин ысынбарлыҡта тормошҡа ашырылған аборттар, тыуыу менән ташландыҡ мөһөрөн алған балалар һаны артыуы, ирекһеҙҙән, уның ысын булыуына ышанырға мәжбүр итә. Ә Республика перинаталь үҙәге, киреһенсә, ғаиләләрҙәге сәйер тынлыҡты бала тауышы ярыуға, күп ғаиләләрҙе тағы ла нығытыуға, бихисап ҡатын-ҡыҙға әсәлек бәхетен тойорға булыша. Бәлки, уның эшмәкәрлеге тәбиғәткә ҡаршы ла киләлер, әммә был - икенсе мәсьәлә...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун өсөнсө көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Уйлау тиҙлеге**

Был программала кеше элек хатта уйлап та ҡарамаған бик күп нәмәне эшләү һәләте асылғансы даими рәүештә күнектерелеүе мөмкин икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Күнегеүҙәр ярҙамында үҙегеҙҙең тынысланыу кимәлен күтәрә, иғтибар туплау һәләтен, ихтыяр көсөн арттыра, хәтерегеҙҙе һәм ижади һәләттәрегеҙҙе яҡшырта алаһығыҙ.

Аңды күнектереүҙең һәм уның уйлау һәләтен күтәреүҙең (мәҫәлән, эш йәки мөһим мәсьәләне хәл иткәндә) һөҙөмтәле ысулдарҙың береһе булып "Уйлау тиҙлеге" тора. Аҡылдың эшмәкәрлеген арттырыу өсөн уны тейешле кимәлгәсә "йылытырға" кәрәк. Бының өсөн түбәндәге күнекмәне эшләгеҙ.

**Уйлау тиҙлеге**

Теләһә ниндәй гәзитте йәки журналды алып, күҙегеҙгә иң тәү салынған мәҡәләлә иң беренсе күргән исемде табығыҙ (мәҫәлән, "Сәләмәтлек" битендә "сәләмәтлек" һүҙе). Хәҙер биш минут дауамында тиҙ генә һәм бер туҡтауһыҙ "сәләмәтлек" һүҙен әйткәндә нимә күҙ алдығыҙға килә, шуны яҙығыҙ. Биш минут үткәндән һуң бер минут ял итегеҙ. Мәҫәлән, тәрән итеп тын алыу күнекмәһе, һәм артабан проект өҫтөндә эшләүҙе дауам итегеҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Камил туҡланыу**

Тормоштан мөмкин тиклем күберәкте алыу һәм уларҙың барыһын да тормошҡа ашырыу өсөн етерлек энергияға эйә булыу организмығыҙҙы нимә менән туҡландырыуға бәйле. Был өлкәлә бик иғтибарлы булырға тейешһегеҙ. Насар аҙыҡ әүҙемлекте кәметә, күңел торошона йоғонто яһай һәм дөйөм сәләмәтлекте насарайта. Йәшелсә-емешкә бай диета көсөгөҙҙө, энергияғыҙҙы һәм йәшәү һәләтегеҙҙе тотоп торорға ярҙам итер.

Бөгөн үк 15 минут табып, һуңғы ике көндә нимә ашағанығыҙҙы яҙығыҙ. Әгәр барыһын да иҫләй алмайһығыҙ икән, ошо ваҡытта ғәҙәттә нимә менән туҡланаһығыҙ, шуларҙы яҙығыҙ. Бигерәк тә майлы аҙыҡтарҙы билдәләгеҙ (һөт аҙыҡтары, ҡыҙҙырылған аҙыҡтар, тиҙ туҡланыу аҙыҡтары, майлы тәмләткестәр, салаттарға төрлө соустар, кондитер ризыҡтары һәм сырҙар). Икенсе аҙнала бындай продукттарҙы ҡулланыуҙы 25 процентҡа кәметегеҙ. Был бик ҡыйын түгел, сөнки магазиндарҙа уларҙың майһыҙ аналогтарын алырға мөмкин.

Шулай уҡ түбәндә бирелгән сәләмәтлекте һаҡлауҙың ябай ҡағиҙәләрен тотоғоҙ. *а)* артыҡ ашауҙы туҡтатығыҙ. Күпме кәрәк, шунса ғына ашағыҙ, ә ҡалған ризыҡты һис йәлләмәй ситкә этеп ҡуйығыҙ; *б)* иртәнсәк мөмкин тиклем күберәк йәшелсә-емеш ашағыҙ; *в)* киске сәғәт һигеҙҙән һуң ашамағыҙ; *г)* һәр ризыҡты ашағанда күберәк салаттарға өҫтөнлөк бирегеҙ. Шулай уҡ ит ашауҙы кәметегеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Ваҡыт менән идара итеү**

Ваҡыт - беҙҙең иң төп байлыҡтарыбыҙҙың береһе. Аҙна эсендә беҙҙең ҡарамаҡта 168 сәғәт бар. Күпме ваҡытты беҙ бушҡа әрәм итәбеҙ? Көн һайын кисен телевизор алдында ике сәғәт ултырыу 14 сәғәт әрәм үтә тигән һүҙ. Был, уйлап ҡараһаң, бер көн. Ә бит көн дауамында үҙегеҙҙең сәләмәтлегегеҙҙе нығыта, дуҫлыҡ бәйләнештәренә яңы һулыш өрә, барыһына ла күптән һөйләп бөткән китабығыҙҙы яҙа, йәки эш урынығыҙҙа яңы инициатива күрһәтеп, үҙегеҙ күптән лайыҡлы булған урынды ала алаһығыҙ. Ваҡытығыҙҙы бушҡа әрәм итеүҙән туҡтағыҙ!

Ваҡытты бушҡа үткәртеүсе һәм үҙегеҙҙең эш һөҙөмтәлелеген кәметеүсе барлыҡ ысулдарҙы яҙығыҙ. Телефон аша буш һүҙ һөйләү ваҡытын ҡыҫҡартығыҙ һәм ысынлап та хыялығыҙҙы ысынбарлыҡҡа әйләндереүсе мәлдәргә генә иғтибар туплағыҙ. Бушҡа уҙған минутты ла кире ҡайтарыу мөмкин түгел.

**Робин ШАРМА.**



## 7 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Разведчицы". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Сериал (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10, 03.05 "Хищник-2". Триллер (12+).
03.00 Новости.
03.15 "Следствие по телу". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Детективное агентство "Иван-да-Марья". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-6". Комедийный сериал (12+).
23.10 "Сваты-6. За кадром" (12+).
00.10 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
01.10 "Девчата" (16+).
01.55 "Дикие бродяги". Худ. фильм (16+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Рәсүл Логаманов (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.30 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". Ағиҙел (6+)
11.55 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
